ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

17-23 ноябрь (ҡырпағай)

2018

№46 (828)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Ергә күктән берәй метеорит килеп төшмәгәйе йә донъяны һыу баҫмағайы, тип көтмә. Шуны бел: һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, һиңә килә торған бәлә барыбер бер киләсәк һәм һине урап үтмәйәсәк. Ә һинең өлөшкә тейешле булмағанын һин барыбер көтөп ала алмаясаҡһың. Ҡурҡма, шикләнмә, юҡ бәләне уйлап сығарма, һәр ауырлыҡты Хоҙай һынауы тип ҡабул ит. Хоҙай бүләкләгән изгелектәрҙе Ул ебәргән һынауҙар менән сағыштырып ҡара әле: юғалтыуҙарға ҡарағанда табыштарың барыбер күберәк бит.*

***Ғабдулла ҠАРНИ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тарихыбыҙҙың...** тере шаһиты ул — 6-7



**Бәйғәмбәрлектән ҡала шағирлыҡ, тиҙәр.** Мин дә шуға аҙ ғына булһа ла тап килергә тырышам... — 8-9



**Ҡыйыуһыҙ булһа...** бейеү түңәрәгенә йөрөтөгөҙ! — 11



**Исемең шәп булһын!** — 13



**ТВ-программа** — 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республикабыҙҙың яңы етәксеһе иғтибарына ниндәй теләк-тәкдимдәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?

***Рәйсә КУЗБӘКОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы:*** Бөгөнгө көндә милли ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләләре ил етәкселеге кимәлендә ҡат-ҡат йәмәғәтселек иғтибарына еткерелә тора. Шул уҡ ваҡытта милли ҡиммәттәр нигеҙен туған, әсә теле тәшкил итеүен бер генә мәлгә лә онотorға ярамай, сөнки туған телен онотҡан милләт - ул инде теге йәки был милләт булыуҙан туҡтай, тигән һүҙ. Шуға күрә лә бөгөн Рәсәй халыҡтарының һәр береһе алдында әсә телен уҡытыу проблемаһы бер ҡасан да булмағанса киҫкенлеге менән килеп баҫты. Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбиров был мәсьәләләр менән хәбәрҙарҙыр һәм беҙ был хаҡта ла унын аҡыллы, уйланылған фекерен ишетербеҙ әле, тип өмөт итәбеҙ. Әлегә беҙ, йәмәғәтселек вәкилдәре, уҡытыусылар, ата-әсәләр, йәғни ошо проблеманың уртаһында ҡайнаусы, туған телебеҙ яҙмышына битараф булмаған кешеләр, республикабыҙ етәксеһе иғтибарына ҡайһы бер киҫкен һәм унын ярҙамын көткән мәсьәләләрҙе еткерә торорға бурыслыбыҙ, тигән фекерҙәмен. Башҡортостанда һуңғы 5 йылда мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыуҙы ойоштороу мәсьәләләре тулыһынса үҙағышына ҡуйылды. Һөҙөмтәлә башҡорт мәктәптәрендә уҡытыу рус теленә күсерелде. Әлеге көнгә тап-таҙа башҡорт ауылдарында ла 5-се кластан алып уҡытыу рус телендә алып барыла, башланғыс кластарҙа ла математика, "Тирә-яҡ мөхит" предметтары рус телендә уҡытыла, хатта йыр, рәсем дәрестәрендә лә башҡорт телендә бер йыр өйрәтелмәгән, башҡорт тематикаһы бөтөнләй ҡулланылмаған мәктәптәр бар.

Дөйөм белем биреү мәктәптәрен оптималләштереү һөҙөмтәһендә 2010 йылдағы 700 башҡорт мәктәбенән бөгөн ни бары 350 тирәһе генә мәктәп ҡалды. Ауылда уҡытыусылар һаны аяуһыҙ ҡыҫҡартылыуға дусар ителде, гөрләп эшләп торған мәктәп түңәрәктәре, оҙайтылған көн төркөмдәре ябылды. Химия, физика, информатика уҡытыусылары эштән сығарылып, улар урынын ошо предметтарҙан әҙерлек курсы үткән тарих, филология, география уҡытыусылары алды. Шулай итеп, ауыл балаларының закон буйынса билдәләнгән сифатлы белем алыуға хоҡуҡтары тупаҫ боҙолоуға юл ҡуйылды.

Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссияның эшмәкәрлеге туҡтатылды, улар тарафынан Мәғариф министрлығының дәүләт телдәре һәм БР халыҡтары телдәрен өйрәнеү буйынса эш һөҙөмтәләре бөтөнләй иғтибарға алынмай башланы. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы закондың танымаҫлыҡ хәлгә еткергәнсе үҙгәртелеүе, ҡыҫҡартылыуынан һуң был закон башҡорт телен үҫтереүҙе тәьмин итә алмау ғына түгел, туған телебеҙҙе яҡлар хәлдә лә түгел хатта. Башҡорт балалары туған тел булараҡ башҡорт телен уҡымаһа, башҡа милләт ата-әсәләре балаларының республиканың дәүләт телен өйрәнеүен теләмәһә, унын дәүләт теле булараҡ статусы тағы ла төшәсәк. Быйыл 26 октябрҙә РФ Президенты Владимир Путин Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен һаҡлау һәм өйрәнеү буйынса фонд булдырыу хаҡында күрһәтмә бирҙе. Хөкүмәткә өс ай эсендә ошо фондты ойоштороу эштәрен тамамларға ҡушылды. Бындай фонд башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса быйыл Башҡортостанда ла булдырылғайны. Шунан сығып, милли телдәрҙе һаҡлауға, уны өйрәнеүгә мөмкинлек булдырыла, тип аңларға кәрәк. Шулай булғас, республика мәктәптәрендә дәүләт теле булараҡ рус теле менән бер рәттән башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү һәм уҡытыу мәсьәләләрендә принципиаль ҡаршылыҡтар булырға тейеш түгелдер, тигән фекеребеҙҙе республиканың яңы етәксеһе ишетер, иғтибар йүнәлтер, тип ышанабыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

(Башы 1-се биттә).

# Республикабыҙҙың яңы етәксеһе иғтибарына ниндәй теләк-тәҡдимдәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?

***Минзәлә ФАЗЛЕТДИНОВА, "Румикс" ғилми-етештереү фирмаһы директоры:*** Мин әле ҡуҙғатырға теләгән, республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улы иғтибарына еткерергә теләгән һүҙ, беләм, бик күптәрҙең йөрәген һыҙлата. Һүҙ мәктәптәребеҙ хаҡында. Анығыраҡ итеп әйткәндә, һуңғы йылдарҙа оптималләштереү (йәғни ҡаҙнала күпмелер аҡса ҡалһын өсөн) арҡаһында, ябылып, уҡыусыларын төрлө яҡҡа таратҡан ауыл мәктәптәре тураһында. Һөйөп-һөйөлөп кенә үҫәһе балаларҙы ата-әсә ҡуйынынан, ғаилә йылыһынан һәм тәрбиәһенән йолҡоп, ҡаҙна йорттарына - интернаттарға урынлаштырыуҙың касафаты ни рәүешле буласағын кем бизмәнгә һалып ҡараған? Ундай бизмәндәр юҡ! Республикала аҙаҡҡы тиҫтә йылда ауылдарҙа нисә йөҙләп мәктәп ябылды икән, нисәүһе ябылыу алдына тора? Тыуған ауылым - Әлшәй районы Сурай ауылындағы туғыҙ йыллыҡ мәктәпкә ябылыу хәүефе янағас, фиҙаҡәр уҡытыусылар, балалар һанын еткереү өсөн, күрше ауылдарҙан уҡыусылар йыйып, уларҙы үҙ өйҙәрендә йәшәтеп, мәктәпте һаҡлап алып ҡалды. Мәктәбем яҙмышына мин бер нисек тә битараф ҡала алмайым, тормош иптәшем менән уны замандың шәфҡәтһеҙ елдәренән ҡурсаларға тырышабыҙ, даими ярҙам итәбеҙ. Ауылым балаларын ата-әсәнән айырмайынса уҡытыу өсөн бөгөн бюджетта аҡса юҡ икән, хатта уҡытыусыларға хеҙмәт хаҡын үҙебеҙ түләргә әҙербеҙ. Тик уны шәхси мәктәпкә әйләндерергә бирәү ҙә рөхсәт бирмәҫ шул.

Быйыл тағы уҡыусылар һаны етмәгәнлектән, мәктәпте ябыу мәсьәләһе күтәрелеүе ихтимал. Иманым камил: класта бер уҡыусы булғанда ла класс ябылырға тейеш түгел, мәктәптә бер бала ҡалғанда ла уҡыу йорто йәшәргә тейеш! Ниндәй ауыр һуғыш йылдарында ла мәктәптәр һаҡланып ҡалған бит! Ғөмүмән, балаларҙы ғаиләнән тартып алып, ят ҡулдарҙа тәрбиәләү - халҡыбыҙ аҡылына, фиғеленә, тәбиғәтенә яҡын да килмәгән күренеш. Киләсәгебеҙ тамырына балта менән сапҡан ул яман күренеште туҡтатыу кәрәк. Һөйләгәндәр һүҙҙә генә ҡалмаһын өсөн юғары власть органдары, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан был турала ниндәйҙер етди документ төҙөлөргә, уға хоҡуҡи төҫ бирелергә, мәктәптәрҙе ябылыуҙан һаҡлаусы закондарҙы сығарыуға өлгәшеү мотлаҡ. Шуны иҫтә тотайыҡ: ауыл - милләтебеҙ бишеге, мәктәп иһә - уның йәне лә, ҡото ла, күңеле лә.

Башҡортостаныбыҙҙың 100 йыллығын байрам иткәндә ҡалған мәктәптәрҙең ябылыуына ла юл ҡуйһаҡ, ниндәй йөҙ, ниндәй намыҫ менән йәшәрбеҙ, йәмәғәт?



***Спартак ИЛЬЯСОВ, яҙыусы, тарихсы, крайҙы өйрәнеүсе:*** Беренсенән, һүҙҙе шунан башларға теләйем: миңә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы тигәндә "ваҡытлыса" тигән һүҙ оҡшап етмәй. Аңлашыла ки, әле һайланмаһа ла, беҙҙең Башлыҡты ла, башҡа төбәктәр губернаторҙарын да РФ Президенты ышаныс күрһәтеп тәғәйенләп ҡуйҙы, шулай булғас, "вазифаһын башҡарыусы" тип кенә әйтергә булмаймы икән, юғиһә "ваҡытлыса" тигәне күңелде борсоуға һалғандай. Уның ҡарауы, халыҡ мәнфәғәтендә башланып торған яҡшы эштәр "ваҡытлыса" булмаҫ, тип ышанайыҡ. Әлбиттә, Радий Фәрит улына яҡшы "мираҫ" ҡалды тип әйтә алмайым, шулай ҙа беҙ, Башҡортостан халҡы, үҙ тормошобоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртеү йүнәлешендә яңы етәксебеҙгә ҡулдан килгәнсә ярҙам итеп, граждандлыҡ бурысыбыҙҙы үтәргә тырышырбыҙ. Радий Хәбировтың үҙ вазифаһын башҡара башлағас та халыҡ араһына, ауыл райондарына сығып, кешеләр менән аралашыуы, уларҙың тормош-көнкүрештәре менән ҡыҙыҡһыныуы бик оҡшаны, афарин. Етәксенең эшлеклелек сифаттары тап шунда күренә лә. Баймаҡ районы Темәс ауылындағы хәлдәрҙе үҙ күҙҙәре менән барып күреүе лә бик яҡшы булды. Ундағы хәлдәргә беҙ аптыраһаҡ та, шундай уҡ хәлдәге урындар, "ташландыҡ", төпкөл ауылдар үҙебеҙҙә - Учалы районында ла бар. Шул уҡ ата-әсәләр, халыҡ менән кәңәшләшмәйенсә ябып ҡуйылған мәктәптәр, газһыҙлыҡтан, юлһыҙлыҡтан ыҙа сигеүҙәр... Учалы ерҙәренән күпме аҫыл таштар, алтын сығарылалыр - мин белмәйем, ләкин шундайын да бай ресурстарға эйә булған төбәктең бәләкәй ауылдары хәйерсе хәлендә йәшәүен аңым менән ҡабул итә алмайым. Күптән инде сит-ят халыҡтар беҙҙең яҡҡа ла килеп сыҡҡан, йәшерен рәүештә алтын эҙләп, ҡом йыуып яталар, имеш, тигән хәбәрҙәр ишетелә. Ә бөтә халыҡ күреп-белеп торғаны шул: арендаторҙар ҡеүәтле КАМАЗ-дарға шыплап тейәлгән шалҡандай ағастарыбыҙҙы ауыл эргәһенән көн-төн ситкә ташый - юлдарыбыҙҙы боҙоп юҡҡа сығара, ләкин килтерелгән зыян өсөн бер тин дә түләнмәй. Учалыла ағас запасы етерлек, тик бына урындағы халыҡ йорт һалып инеү өсөн ағас ала алмай йонсой. Ағас лимит буйынса ғына бүленә, уны алыу өсөн сират ҙур. Республика Башлығы Учалы яҡтарына ла иғтибар йүнәлтеп, ошо мәсьәләләр тейешле органдар тарафынан тикшерелер һәм контролгә алыныр, тигән өмөттәбеҙ. Шуныһы һәйбәт: Баймаҡ, Белорет, Дыуан райондарында тәбиғи байлыҡтарҙы законһыҙ рәүештә файҙаланыуҙың ҡырағайҙарса осраҡтарынан сығып, Радий Фәрит улы был йәһәттән ғәмәлдәге законды кисекмәҫтән ҡәтғиләштереү тураһында күрһәтмә бирҙе һәм мәсьәләне контролгә алды: "Ошо өс тема: таш, урмандар һәм ҡыр йәнлектәре буйынса беҙ даими шөғөлләнәсәкбеҙ", - тине ул. Үҙгәрештәр оҙаҡ көттөрмәҫ, моғайын.

***Йәмних КАШКАРОВ, хеҙмәт ветераны, Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы:*** Бөгөн ил буйынса ғына түгел, донъя кимәлендә сүплек полигондары мәсьәләһе бик киҫкен тора. Ләкин бына шул глобаль проблемаға һәр кем үҙенән, үҙенең йәшәгән еренән, урындағы мәнфәғәттәрҙән сығып ҡарарға тейеш, тип уйлайым. Сүплектәргә һыймай башлаған сүп-сар, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары, ошо арҡала экологияға килтерелгән зыян, сүп-сарҙы сорттарға айырыу, эшкәртеү мәсьәләләре... Ошоларҙың һәр береһе оло проблемаға әүерелде бөгөн. Шуға күрә республикабыҙҙың яңы етәксеһенә мин дә тәҡдим-теләктәрем менән мөрәжәғәт итергә булдым. Илебеҙ киң, тәбиғи байлыҡтарыбыҙ мул. Байлыҡ күп осраҡта ер аҫтында. Ерҙе аҡтарабыҙ, байлыҡтың кәрәк өлөшөн алабыҙ, файҙаланабыҙ һәм ҡалдыҡтарын Ер өҫтөнә ташлай бирәбеҙ. Бына шул ҡалдыҡтар менән еребеҙ тарығая, бысрана бара. Миңә, ауыл кешеһенә, эш, йомош-юл менән ҡырҙа булырға тура килә. Нәмә генә, ҡайҙа ғына ташланмай: тотонолған һауыт-һаба, кейем, йорт йыһаздары, баҡса-хужалыҡ эштәре ҡалдыҡтары һәм тиреҫ. Эйе, "свалка" исемле урын махсус бүленгән. Әммә уның да майҙаны ҙурая бара. Яндырабыҙ, кәңәш итеүҙәренсә, ергә лә күмеп ҡарайбыҙ. Әммә яғып, һауаны бысратабыҙ. Хәҙерге химик юл менән етештерелгән тауарҙарҙың зыянын улар ҡулланыуҙан сыҡҡандан һуң яндырып та юҡ итеп булмай, киреһенсә, янған ваҡытта уларҙан канцероген матдәләр бүленеп сыға. Улар озон ҡатламына тиклем күтәрелеп, зарарлы берләшмәләр барлыҡҡа килтерә һәм тупраҡ, һыу, һауабыҙҙы бысратып, ҡар, ямғыр

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров үткән ял көндәрендә төньяҡ-көнсығыш райондарға эш сәфәре барышында Дыуан, Мәсетле, Салауат райондары мәктәптәрендә, дауахаларҙа булды, Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында ишле ғаиләләр өсөн биҫтә төҙөлөшөн ҡараны, булған проблемалар менән танышты.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Мирхәйҙәр Фәтҡуллинды Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләне. Фәтҡуллин Мирхәйҙәр Борис улы 1974 йылдың 31 мартында Баймаҡта тыуған. Ҡаҙан финанс-иҡтисад институтын, ил Президенты ҡарамағындағы Рәсәй халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһын тамамлаған.

✓ Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем биреү министрлығы "Башҡорт дәүләт педагогия университеты" юғары белем биреү федераль дәүләт бюджет белем биреү учреждениеһы ректоры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыуҙы Башҡортостан Хөкүмәтенең элекке вице-премьеры Салауат Сәғитовҡа бер йылға тейешле тәртиптә ректор билдәләгәнгә тиклем йөкмәтеү тураһында бойороҡ сығарҙы.

✓ Фәнзил Сыңғыҙов Ғафури районы башлығы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры, ә унан алда 2001 йылдан Ҡырмыҫҡалы районына етәкселек итте. Ғафури районының әлеге башлығы Рәмил Бохаров отставкаға китте.

✓ 20 ноябрҙән республикала дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль юлдарын төҙөкләндергәндә ҡайнар асфальт-бетон ҡатнашмаларын һалыу тыйыла. "Көҙгө осорҙа ҡайнар асфальт-бетон ҡатнашмаларын түшәү 20 ноябргә тиклем һауа температураһы +5 градустан юғары булған осраҡта ғына тормошҡа ашырыла", - тип һөйләне республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов.

✓ Рәсәй почтаһы бәйләнеш үҙәгенең телефон номеры үҙгәрҙе. Хәҙер клиенттарҙы яҡлау хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре менән 8-800-100-00-00 телефоны буйынса бәйләнешкә сығырға мөмкин. Шуның менән бергә быға тиклемге номер клиенттарҙан шылтыратыуҙар килгәнсе ғәмәлдә була, тип аныҡлыҡ индерҙеләр компанияның матбуғат хеҙмәтендә.

аша кире ергә төшә, ундағы микроорганизмдарҙы юҡҡа сығара, үҫемлектәрҙе ағыулай, кеше һәм хайуандарға тәьҫир итә. Былар тәбиғәттең үҙ-ара бәйләнеше, әйләнеше. Илдәр быны аңлай, тәбиғәтте һаҡларға ынтыла. Элек беҙҙә лә ҡалдыҡтарҙың ҡәҙере бар ине. Улар йыйыла, һатып алына ине. Мәҫәлән, ярты литр күләмле шешәне тапшырып, ауырлығы 960 г (бөгөн 520 г) булған бер буханка икмәк, 4 ҡап шырпы алыр инек. Сепрәк-сапраҡ, быялаһын, йөн-ҡауырһын, тиреһен, хатта һөйәккә тиклем йыйыр булдылар. Бөгөн уларға иғтибар итеүсе юҡ. Ошо беҙҙең вайымһыҙлыҡ Еребеҙҙе тарайта, бысрата. Шуғалыр ҙа Хөкүмәт ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары (ТКО) тураһында 2014 йылдың 29 декабрендә махсус Закон да ҡабул итте, ниһайәт. Закон нигеҙен, асылын аңлатып матбуғат күп мәғлүмәт бирә. Әммә ул аҡса йыйыуға ғына ҡағылған һымаҡ.

Ауыл халҡы мал тота, баҡсаһы бар. Уларҙың сүп-сары баҡсанан ары китмәҫкә тейеш, йәнәһе. 5-6 (унан да күберәк) һыйыр малы тотҡандар бар. Улар үҙҙәре тиҙәккә күмелһенме? Ә сыбыҡ-сабыҡ, ағас ҡалдыҡтары? Хәйер, ул ҡалдыҡтар ҡала халҡында ла бар. Күптәре "6 сотый" тота. Бына шул көнкүреш ҡалдыҡтары менән эш итеүселәр булһын ине. Ул, эшсе булараҡ, ҡалдыҡтарҙы туплар, серейәсәк ағас, мал тиҙәген һөрөнтө ергә сығарыр, тәртип һәм таҙалыҡ өсөн яуаплы ла булыр ине. Ҡыҫҡаһы, сүп-сар, ҡаты ҡалдыҡтарҙы эшкәртеү буйынса ғына түгел, йәшәгән еребеҙҙе таҙалыҡта, төҙөклөктә тотоу бурысын да контролгә алһын һәм уны закон нигеҙендә талап итһен ине ауыл хакимиәттәре. Ә ауыл хакимиәттәрен эшкә ҡушыу юғары власть органдары ҡулынан ғына киләлер, тип уйлайым.

***Нурия ҠУНЫСБАЕВА, Ейәнсура районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Тарихтан билдәле булыуынса, донъяла бик күп милләттәр юҡҡа сыҡҡан. Был юғалыу әхлаҡһыҙлыҡтан, маңҡортлоҡтан һәм ил, милләт өсөн яуаплы булған хужаларҙың киләсәккә ҡарата битарафлығынан башланған. Милләтебеҙҙе бөгөн ҙур афәт - эскелек ялмап алып бара. Енәйәттәр, үҙ-үҙеңә ҡул һалыу, ата-әсәһе тере булып та етем ҡалған балалар - барыһы ла ошонан башлана. Беҙ, ағинәйҙәр, милләтебеҙ үҙ тамырҙарынан ситләшмәһен, эскелек кеүек яман ғәҙәттәргә бирелмәһен тип оран һалабыҙ, ауылдарҙа сәләмәт мөхит һаҡларға тырышабыҙ. Айыҡлыҡ өсөн көрәш юлында күпмелер дәрәжәлә тәжрибә туплағанбыҙ. Эскелеккә, насар ғәҙәттәргә ҡаршы өндәгән лекциялар менән сығыш яһайбыҙ, был насар юлға төшкән ғаиләләр менән эшләйбеҙ, спиртлы эсемлек һатҡандарҙы билдәләйбеҙ, иҫкәртеү сараларын күрәбеҙ. Ләкин был ғына аҙ. Эскелек менән көрәшкә бар йәмғәтселек менән күтәрелергә кәрәк. Был дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейеш. Был яуызлыҡҡа ҡаршы ил, хөкүмәт тарафынан аныҡ саралар күрелергә, фармандар сығырға һәм үтәлергә тейеш. Ошо юҫыҡта ла республикабыҙ Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировҡа өмөтөбөҙ ҙур. Был яуаплы эшкә әле яңы ғына килеү менән гәзиз Башҡортостаныбыҙ киләсәген хәстәрләп, ҡайһы бер мөһим эштәрҙе башланы ла инде. Айыҡлыҡ сараларына ла етди иғтибар бирелһен ине уның тарафынан. Мәҫәлән, бер нисә йыл рәттән үткәрелгән "Айыҡ ауыл" республика конкурсына ҙур өмөт бағлағайныҡ. Уның беҙҙә һөйөндөргән һөҙөмтәләре лә булды, айыҡлыҡҡа юл һалынды. Һәр хәлдә, кешеләр аңына "Эскелек хурлыҡ ҡына түгел, ул күрәләтә үҙ ғүмереңде ҡыйыу, йәш быуындың тамырына балта менән сабыу", тигән хәҡиҡәт һеңдерелә башлағайны. Тик был матур башланғыс Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан яҡлау тапманы, күтәреп алынманы. Яңы республика етәксеһе ошо "Айыҡ ауыл" конкурсы һымаҡ сараларҙы хуплаһа, Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ киләсәге өсөн эшләнгән ҙур бер аҙым булыр ине. Сөнки эскелек әле оло яуызлыҡ булараҡ йәшәүен дауам итә. "Халҡыңды күтәреп, һин үҙеңде лә күтәрәһең", тигән хәҡиҡәт йәшәй. Радий Хәбиров халыҡ тауышын ишетер, ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар аҡылына ҡолаҡ һалыр, тип ышанабыҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек. Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Бының өсөн һеҙгә почта бүлексәһенә инеп, йә почтальонға мөрәжәғәт итеп, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 609 һум 96 тингә яҙылырға ғына ҡала.**

• Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеүебеҙҙе беләһегеҙ. Ноябрь айына тиклем 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙы бүләкләп китәбеҙ:

Межгорье ҡалаһынан Ғәлиевтар ғаиләһе - Мәүлит Ямалетдиновтың **"Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**;

Стәрлетамаҡ районы Күсәрбәй ауылынан Ф. Аҡсулпанова, Миәкә районы Исламғол ауылынан Зәлифә Шафиҡова, - **"Башкиры"**;

Бөрйән районы Байназар ауылынан Зөһрә Айытҡолова - **Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской республики"**;

Миәкә районы Күл-Ҡонҡас ауылынан Хәлил Абдуллин - **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"**;

Әбйәлил районы Ишҡол ауылынан Ф.Юлдашбаева - **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ"**;

Учалы районы Миндәк ҡасабаһынан Ф. Тайфурова, Федоровка районы Батыр ауылынан Миҙхәт Багаев - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**;

Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Фәниә Фәйзуллина, Баймаҡ ҡалаһынан М. Байрамғолов- **Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"**;

Баймаҡ районы Темәс ауылынан Сания Әминева, Хәйбулла районы Өфө ҡасабаһынан Фәриҙә Шәрипова, Ҡырмыҫҡалы районы Бишауыл-Уңғар ауылынан Рәмилә Исхаҡова - **Миләүшә Ҡаһарманованың "Күңелем йылы теләй"**;

Учалы районы Рысай ауылынан Хәтижә Сәғитова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан"**;

Баймаҡ районы Ғүмәр ауылынан Йосоп Үҙәнбаев, Белорет районы Ассы ауылынан Фаҡиһа Хәмзина, Сибай ҡалаһынан Н. Ҡорманова - **Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип таныш ығыҙ"**;

Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Фәнүзә Хәкимова, Баймаҡ районы Күгиҙел ауылынан Нәилә Аблаева - **Таңһылыу Ҡарамышеваның "Мәңгелек сәфәр"**;

Ишембай районы Һайран ауылынан Сәриә Ҡорбанғәлиева, Баймаҡ районы Түбәнге Таһир ауылынан Клара Байраҡаева, Баймаҡ ҡалаһынан Гүзәл Йәнбәкова, Учалы ҡалаһынан Ғилминур Хәкимова, Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Бәширә Усманова, Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан Гөлдәр Шафиҡова - **Рауил Бикбаевтың "Ете йөҙ етмеш хәҙис"**;

Салауат ҡалаһынан А. Солтанморатова, Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылынан Г. Рәхимҡулова, Урғаҙа ауылынан Г. Хисаметдинова, Учалы районы Истамғол ауылынан А. Ғәйетҡолова, Әбйәлил районы Байым ауылынан З. Яҡупова, Сибай ҡалаһынан Фирүзә Алсынбаева - **Рауил Бикбаевтың "Онотторлоҡ булдымы ни?.."**;

Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Ләлә Сәғитова, Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Рәмилә Ғәйзуллина, Күмертау ҡалаһынан Резедә Вахитова, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Әхәт Ҡарамырҙин, Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылынан М. Кәбирова - **Рауил Бикбаевтың "Атлы азамат"** китаптарына лайыҡ булды.

• **Ноябрь, декабрь айҙарында ла гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреүҙе дауам итегеҙ, ошондай һәм башҡа китаптар кемдәрҙеңдер өлөшөнә эләгеүе бик мөмкин.**

**Иҫкәрмә:** бүләкләнеүселәр китаптарҙы балалары, туғандары, таныштары аша алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Әйҙәгеҙ, хөрмәтле йәмәғәт", "Киске Өфө"гә лә берҙәм генә яҙылып алайыҡ. Беҙҙең тираж баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон ғына түгел, ә уҡыусыларыбыҙҙың тоғрологон, ихтирамын, шулай уҡ милләтебеҙҙең аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе билдә икәнен онотмайыҡ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 20 ноябрь - Бөтә Рәсәй балаларға хоҡуҡи ярҙам көнө. Был көндә Башҡортостандың Мәғариф министрлығында мөрәжәғәт иткәндәрҙең барыһына ла консультациялар бирелә. Көн дауамында ведомствола (Театр урамы, 5/2) иртәнге сәғәт 9-ҙән киске 6-ға тиклем 109-сы, 112-се бүлмәләрҙә хеҙмәткәрҙәрҙән балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлау, етем балалар, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр, ауыр тормош хәлендә ҡалған балалар өсөн социаль гарантиялар һәм башҡа ярҙам саралары тураһында һорауҙарға яуап алырға мөмкин.

✓ Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы проектында органдарҙы алырға һәм күсереп ултыртырға мөмкин булған учреждениеларҙың исемлеген раҫларға тәҡдим итәләр. Дөйөм алғанда, илдә 44 федераль һәм 113 дәүләт бюджет медицина учреждениеһын раҫларға уйлайҙар.Исемлектә Башҡортостандың баш ҡалаһынан ете дауахана бар, уларҙың араһында бер федераль медицина учреждениеһы - Бөтә Рәсәй күҙ һәм пластик хирургия үҙәге.

✓ Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев Ҡырғыҙстанда "Айытматов һәм театр" халыҡ-ара театр фестивалендә ҡатнаша. Ул жюри ағзаһы итеп саҡырылған. Яҙыусының 90 йыллығына арналған фестиваль 12-17 ноябрҙә Бешкәк ҡалаһы сәхнәләрендә уҙа.

✓ 2019 йылдан Башҡортостанда социаль туризм программаһында ҡатнашыусылар электрон сертификаттар ала башлай. Сертификатта юллама хаҡының бер өлөшөн ҡаплаған субсидия күҙ уңында тотола. Пенсионерҙарға - һигеҙ мең, етем балаларға 12 мең һумын ҡаплау ҡаралған. Пенсионерҙар һәм башҡа социаль төркөмдәр өсөн 111 маршрут тәҡдим ителгән (Башҡортостан буйлап 85 һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәре буйлап 26).

✓ Башҡортостанда киҫкен респиратор инфекциялар менән ауырыусылар һаны арта. Ә вирус инфекцияһының ныҡлап таралыуы 2019 йылдың февраль-мартында көтөлә. Санитар табиптар фаразлауынса, республика биләмәһендә өс грипп вирусының таралыуы мөмкин. Улар - А1 "Мичиган", А2 "Сингапур" һәм В "Колорадо". Бынан алдағы йылдарҙа Башҡортостанда улар күҙәтелгәйне һәм ҙур хәүеф тыуҙырырға тейеш түгелдәр.

✓ *Етәкселәрҙең эшмәкәрлеген мин ике төп критерий - һөҙөмтәле профессионаллек һәм кешелек сифаттары, башҡалар менән мөнәсәбәттәрҙәге намыҫлылыҡ буйынса баһалаясаҡмын.*



ҠЫҪҠАСА

# ТӘҮГЕ ТАПҠЫР ҺӘМ...

## тәүге урында!

✓ **"Медиалогия" мәғлүмәт аналитика системаһы 2018 йылдың октябре өсөн Волга буйы федераль округы губернаторҙары медиарейтингын төҙөнө.** Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тәүге тапҡыр рейтингка инде. Бынан тыш, республика етәксеһе беренсе урында тора. Уҙған айҙа Радий Хәбиров хаҡында киң мәғлүмәт сараларында 9774 яңылыҡ баҫылған (медиаиндекс 100 376,0). Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы артынса Татарстан башлығы Рөстәм Миңнеханов килә (7978 яңылыҡ һәм медиаиндекс 60 823,8). Өсөнсө урында - Түбәнге Новгород өлкәһе губернаторы Глеб Никитин (8086 яңылыҡ һәм медиаиндекс 52 403,8).

✓ **Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Өфөләге Граждандарҙы яҡлау идаралығының мәғлүмәт-диспетчер үҙәгендә булды.** Төбәк етәксеһе "Хәүефһеҙ ҡала" аппарат-программа комплексының йәмәғәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән сегменттары эше менән танышты. Әйтәйек, баш ҡалала халыҡ күп йөрөгән урындарҙа 300-ҙән ашыу видеокүҙәтеү камераһы ҡуйылған. Уларҙан алынған мәғлүмәт эшкәртелә һәм артабан мәғлүмәт-диспетчер үҙәге серверҙарында һаҡлана. Ҡалалағы дөйөм белем биреү учреждениеларының тышҡы күҙәтеү камералары ла ошо уҡ системаға тоташтырылған. Радий Хәбиров үҙәк белгестәре менән бергә системаның эшен һынап ҡараны һәм уны яңыртырға, артабан үҫтерергә кәрәклеген билдәләне. Мәғлүмәт-диспетчер үҙәгендә берҙәм 112 номеры буйынса оператив хеҙмәттәрҙе саҡырыу системаһы ла эшләй, экологик хәлде, гидрологик хәүефтәрҙе күҙәтеү ойошторолған, ГЛОНАСС нигеҙендә транспорт менән идара итеү мониторингы системаһы индерелгән.

✓ **Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың тораҡ пункттарында урамдарҙы яҡтыртыу мәсьәләһе тикшерелде.** Уҙғарылған мониторинг һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, республика ҡала-райондарында урамдарҙы һәм тыҡрыҡтарҙы яҡтыртыу 67,8 процент тәшкил итә. Өҫтәүенә, 25 муниципалитетта был уртаса республика күрһәткесенән түбәнерәк, ә ҡайһы бер тораҡ пункттарҙа 30 процентҡа ла етмәй. Бынан тыш, 2,5 мең балалар баҡсаһы һәм мәктәптәрҙең 592-һендә 500 метр радиусында тейешле фонарҙар юҡ. "Был бик ҙур проблема. Был халыҡтың көнитмеше уңайлығы проблемаһы. Яҡтыртыу мәсьәләһе - хәүефһеҙлек тәьминәтенең төп элементтарының береһе", - тип билдәләне республика етәксеһе Радий Хәбиров. Уның һүҙҙәренсә, яҡтыртыуҙы тәү сиратта урамдарҙа терәүҙәре һәм линиялары булған фонарҙарҙы монтажлау иҫәбенә арттырырға кәрәк. Муниципалитеттарға киске һәм иртәнге сәғәттәрҙә эш ваҡытын арттырып, төндә яҡтыртыу системаларының эш графигын ҡайтанан ҡарау бурысы йөкмәтелде.

ЕТӘКСЕНЕҢ ӘЙТКӘНЕ...

# КЕШЕЛӘР МЕНӘН - КЕШЕЛӘРСӘ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров Өфө ҡала округы хакимиәтендәге кәңәшмәлә ҡатнашты һәм унда йыйылған идаралыҡтар, предприятиелар, ойошмалар етәкселәре алдында үҙенең идара итеү күҙаллауҙары, талаптары, әхлаҡи принциптары, етешһеҙлектәрҙе төҙәтеү буйынса тәҡдимдәре менән уртаҡлашты.**

Радий Фәрит улы иң тәүҙә чиновниктарҙы халыҡ менән иғтибарлы мөнәсәбәт урынлаштырырға саҡырҙы: "Беҙҙең Рәсәй, Башҡортостан йәмғиәтендә ғәҙеллеккә бик етди ихтыяж бар. Шуға ла чиновниктың тәкәбберлеген, тупаҫлығын, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә эрелеген тамырынан ҡоротоуҙы талап итәсәкмен, - тип айырып әйтте ул. - Кешеләр менән кешеләрсә мөғәмәлә итергә кәрәк... Етәкселәрҙең эшмәкәрлеген мин ике төп критерий - һөҙөмтәле профессионаллек һәм кешелек сифаттары, башҡалар менән мөнәсәбәттәрҙәге намыҫлылыҡ буйынса баһалаясаҡмын. Мин һеҙҙең кешеләр менән партнерҙарса, өлкән иптәштәрсә мөнәсәбәт ҡороуығыҙҙы теләйем. Беҙҙең республикала байҙарса мөнәсәбәт булмаясаҡ. Чиновниктарҙың халыҡ менән танау күтәреп аралашыуы булмаясаҡ. Ысынында, һеҙҙе бит был эшкә берәү ҙә көсләп килтереп ҡушмаған. Һеҙ халыҡҡа хеҙмәт итергә килгәнһегеҙ. Шуның өсөн эшегеҙҙе шулай ойошторорға кәңәш итәм: кешеләрҙе ишетегеҙ, уларға иғтибарлы булығыҙ һәм мәсьәләләрен хәл итегеҙ. Бәлки, һеҙ берәүҙән дә рәхмәт һүҙе лә ишетмәҫһегеҙ. Киреһенсә, һеҙгә халыҡтан тәнҡит һүҙҙәре күберәк тә яуыр. Донъя шулай ҡоролған. Ҡасан да булһа ишетерһегеҙ һеҙ ул рәхмәт һүҙен, ләкин уға тиклем һеҙгә бик оҙаҡ һәм егелеп эшләргә тура киләсәк әле..."

"Икенсенән, мин һеҙҙең менән Өфө тураһында һөйләшергә теләйем, - тине артабан Радий Фәрит улы. - Республикабыҙ өсөн Өфө, Өфө агломерацияһы бик ҙур әһәмиәткә эйә. Бында республика халҡының дүрттән бер өлөшө йәшәй, төп сәнәғәт ҡеүәттәре урынлашҡан, төп һалым түләүселәр ҙә бында. Шуның өсөн Өфө һәм Өфө районы нисек йәшәй, нисек тын ала, нисек үҫешә икәне беҙҙең өсөн бик мөһим", - тип билдәләне Радий Фәрит улы һәм Өфөлә күптән булмаған кешенең тәьҫораттары менән уртаҡлашып, ҡаланы төҙөкләндереүҙә булған асыҡтан-асыҡ дисбалансты билдәләне. Ул Өфөлә башҡа бер ерҙә лә булмаған матур урындар барлығын, шулай уҡ етәкселәрҙең ҡулы һәм иғтибары етмәгән урындар - "ташландыҡ хәлгә килгән меңләгән объект" табырға мөмкин булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм Өфөлә оҙаҡ төҙөлгән социаль объекттарҙы иғтибар үҙәгенә алыуҙы һәм ҡаланы тәртипкә килтереүҙе талап итте. Мәҫәлән, Амантай урамындағы биш йыл элек үк төҙөлөп тә, һаман файҙаланыуға тапшырылмаған поликлиника тарихы менән таныш булыуын хәбәр итте һәм ҡалаға был поликлиниканы сафҡа индерергә рөхсәт алыу һәм Өфө күперҙәрен ремонтлау менән ярҙам итергә вәғәҙәләне. Радий Фәрит улы торлаҡ төҙөлөшөндәге хәлде ҡаланың киҫкен мәсьәләләренең береһе тип атаны. Ошо тармаҡта уйламай эшләнгән, яуапһыҙ ҡарарҙар нәҡ Өфөлә, Өфө районында алданған өлөшсөләрҙең бик күп булыуына килтереүен әйтте. "Беҙҙең бурыс - күп, быға тиклем төҙөлгәнгә ҡарағанда ла күберәк, шул уҡ ваҡытта халыҡҡа йәшәү уңайлыҡтары, нормаль социаль инфраструктураһы булған торлаҡ төҙөү", - тине.

Өфө бысраҡ ҡала кеүек тәьҫир ҡалдыра, тип тә белдерҙе Радий Хәбиров. Ул ҡала хеҙмәттәренә, яғыулыҡ-майлау материалдары һәм башҡа ресурстар менән ярҙам итергә вәғәҙәләп, урамдарҙы таҙартыу мәсьәләһе менән ныҡлап шөғөлләнергә тәҡдим итте. "Өфө - бик матур ҡала. Ҡыҙғанысҡа күрә, уға һоҡланып йөрөргә ваҡыт юҡ. Ләкин көн һайын Салауат Юлаев проспектынан йөрөргә тура килә, ә унда 10 сантиметрлыҡ бысраҡ. Шуға күрә, тәү сиратта таҙалыҡ булдырыу зарур", - тине республика етәксеһе мэрия хеҙмәткәрҙәренә бергәләп ҡала буйлап йөрөргә тәҡдим итеп (әйткәндәй, беҙҙең белеүебеҙсә, Өфөлә урам һепереүселәр һәм техника етешмәй, көҙ көнө уларҙы "ҡышҡыға" кейендерәләр, ә бысраҡты таҙартыу өсөн техника юҡ. Ямғыр канализацияһының булмауы, газондарҙың һәм юлдарҙың дөрөҫ проектланмауы ла урамдарҙа бысраҡ һәм саң йыйылыуға булышлыҡ итә - **Авт.**). Радий Фәрит улы был теманы дауам итеп, йорт ихаталарында, йорт подъездарында ла шундай уҡ тәртипһеҙлек һәм бысраҡ булыуына иғтибар йүнәлтте. Пассажирҙар транспорты мәсьәләһен дә яңынан телгә алды һәм ул хәлдең тиҙ арала тотороҡланасағына ышаныс белдерҙе.

"Мәсьәләләрҙе хәл итеүҙең меңәрләгән ысулы бар, - тине Радий Фәрит улы һөйләшеү аҙағында. - Иң мөһиме - уларҙы хәл итеүгә ихтыярың булһын. Ихтыяр булһа, хәл ителеше табыла. "Ватыҡ тәҙрәләр" теорияһын беләһегеҙҙер. Заманында Нью-Йорк мэры Джулиани ошо теория менән ҡоралланып, эшен яйға һалған. Ниндәйҙер бер мәлдә ул шуны аңлап ҡала: әгәр ҙә бер йортта бер тәҙрә ватыҡ икән, ике аҙнанан бындағы бар тәҙрә быялалары ла ватыҡ буласаҡ. Кешенең тәбиғәте шундай: бер тәртипһеҙлек икенсе тәртипһеҙлекте, йәғни енәйәтсел ҡылыҡты тыуҙыра. Шунан Джулиани махсус бригада булдырып, һәр тәҙрәнең ватыҡ быялаһын алыштырта, Гарлем станцияһындағы стенаға яҙылған һәр яҙыуҙы таҙарттыра башлай. Кешеләр уны юҡ менән булмаҫҡа өгөтләй. Ләкин мэр был эште һәр иртәлә башҡарыуҙы дауам итә. Полиция эшен дә көсәйтә. Эш шуға барып етә: кемдер берәү тәмәке төпсөгөн ташлай икән, уға биш полицийский ябырыла... Тәртип бына ошондай ваҡ нәмәләрҙән - дөрөҫ урынлаштырылған юл билдәһенән, ваҡытында йыуылған урналарҙан, юйып ташланған яҙыуҙарҙан башлана..."

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Өфө ҡала округы хакимиәтендәге был кәңәшмәне семинар-уҡыу тип атанылар һәм унда Радий Фәрит улынан башҡа БР Премьер-министр урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Илшат Тажетдинов, БР торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Михаил Киреев, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин, Өфө районы хакимиәте башлығы Вилорий Угаров, "Башинформ"дың директорҙар Советы етәксеһе Ростислав Мырҙағолов һәм БР Башлығы эргәһендәге халыҡ мөрәжәғәттәре буйынса эшсе төркөм кураторҙары ла ҡатнашты. Һәр береһенең сығышы ҡыҙыҡлы булды. Тик беҙ бында Радий Фәрит улының сығышынан ғына өҙөктәр килтерҙек һәм гәзит уҡыусыларыбыҙға яңы республика етәксеһенең идара итеү алымдарына, пландарына бер аҙ ғына байҡау яһаттыҡ.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң Совет районы хакимиәте башлығы Урал Килсенбаевҡа Башҡортостан Башлығы Хакимиәтендә вазифа бирелде. Радий Хәбиров үҙенең бойороғо менән уны ижтимағи-сәйәси үҫеш буйынса идаралыҡ етәксеһе итеп тәғәйенләне. Урал Килсенбаев 2015 йылдың мартында Өфөнөң Совет районы башлығы итеп тәғәйенләнгәйне.

✓Тотош илдә "Рәсәйҙең бөйөк исемдәре" проектында тауыш биреү бара, ул 12 ноябрҙә башланды. Теләгән һәр кем илдең 47 аэропортының береһенә, шул иҫәптән Өфөләгеһенә исем һайлай ала. Өфө аэропортына дәғүә иткән исемдәр: ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, халыҡ шағиры, яҙыусы Мостай Кәрим һәм башҡорттарҙың милли батыры Салауат Юлаев. Рәсәй аэропорттарына бирелергә тейешле исемдәр 2018 йылдың 5 декабрендә билдәле була.

✓Хәҙер "Башавтотранс" автобустарында юл хаҡы өсөн ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшергә мөмкин. Бынан тыш, юлда йөрөгән өсөн банк картаһы контактһыҙ беркетелгән телефон ярҙамында ла түләргә була. Пассажирҙар үҙҙәренең банк карталарын тулы күләмдә файҙалана ала. Өфө буйлап йөрөү, ҡулаҡса менән иҫәпләшкән кеүек үк, 25 һум. Транспорт картаһы буйынса юл хаҡы үҙгәрмәгән һәм 20 һум тәшкил итә.

✓13 ноябрҙә кискеһен Өфөләге автозаправкалау станцияларында дизель яғыулығына хаҡтар үҙгәрҙе. Атап әйткәндә, "Лукойл" компанияһы заправкаһында дизель яғыулығының бер литры бер юлы ике һумға артҡан - 46 һум 90 тин. Башҡортостандың баш ҡалаһындағы "Башнефть" станцияларында ла дизель яғыулығының хаҡы 45 һум 50 тингә тиклем ҡимmәтләнгән.

✓Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты рәйесен (мөфтөйөн) һайлауҙы 2019 йылдың ноябренә күсерҙеләр. Бындай ҡарар 14 ноябрҙә Өфөлә мөфтөй Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин етәкселегендәге Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты президиумының сираттан тыш ултырышында "Башҡортостандың мосолмандар өммәһендә рухи берҙәмлекте, тыныслыҡты һәм тотороҡлоҡто һаҡлау маҡсатында" ҡабул ителгән.

✓ *Өлфәт Мансур улы ни өсөн объекттарҙы тапшырыу ваҡытының графиктан сығыуы, ремонт сифатының ҡәнәғәтләнерлек булмауы менән ҡыҙыҡһынды. Милекселәрҙән ошо йәһәттән ялыуҙар килеүе дауам итә.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмә Федор Решетниковтың киң билдәле "Тағы ла икеле" картинаһын күҙ алдына баҫтырҙы. Сөнки был юлы ҡала башлығы оператив кәңәшмәне уҙған аҙналарҙа ҡушылған бурыстарҙың үтәлешен тикшереүҙән башланы. Юҡ, яуаплы вазифа биләүселәр икеле алған малай кеүек баштарын эйеп, күҙҙәрен йәшереп баҫып торманы, ә ентекле итеп яуап бирергә тырышты.**

# ТАЛАПТАР ҠАТЫЛАНА...

Өлфәт Мансур улы яуап талап иткән иң беренсе мәсьәлә Өфө-Аэропорт юлының тирәяғын ваҡ ағастарҙан таҙартыу ине. Был эш 31 октябрҙә тормошҡа ашырыла башлаған, ә инде уларҙы сығарыу 27 ноябргә тамамланасаҡ. Билдәләнеүенсә, Өфө-Аэропорт юлы ҡышҡы һәм йәйге таҙартыу регламентына ярашлы тәрбиәләнә, артабан йәш ағастарҙы ҡырҡыу ошо документҡа индереләсәк.

Шулай уҡ үткән кәңәшмәлә социаль тәғәйенләнештәге объекттар төҙөлөшө, төҙөлөш эштәрен ошо учреждениеларҙың ихтыяжын иҫәпкә алып планлаштырыу буйынса тәҡдимдәр индереү бурысы ҡуйылғайны. Әлегә мәғариф буйынса кураторҙар менән берлектә кәңәшмә үткәрелгән, эш күләме билдәләнгән. 2019-2020 йылдарға мәктәптәр төҙөлөшөн проектлау талап ителә, әммә бының өсөн аҡса кәрәк. Иң мөһиме - эш бара.

Тағы бер ошо арала хәл ителергә тейешле проблема - Киров районында урынлашҡан, тарих һәм архитектура һәйкәле булып һаналған, мәҙәни мираҫ объекты исемлегенә индерелгән, әммә бөгөн ташландыҡ хәлдәге Вахмянин мунсаһына ҡағылышлы ине. Ҡала хакимиәте башлығы әйткәндән һуң унда ҡоймаһы тергеҙеү, буяты буйынса ремонт эштәре башҡарылған, сит-яттар бина территорияһына инеп йөрөмәһен өсөн тәртип урынлаштырылған. Шулай уҡ территорияны үҙләштереү маҡсатында тағы ла ике инвесторҙы йәлеп итеү мөмкинлеге ҡаралған.

Шулай ҙа һуңғы ваҡытта ҡала округы хакимиәте башлығының ғына түгел, ғөмүмән, республика Башлығының иғтибар үҙәгендә пассажирҙар транспорты өлкәһендә тәртип урынлаштырыу мәсьәләһе торғандыр. Был йәһәттән, 23 октябрҙән алып 18 маршрут буйынса ҡайһы бер транспорт сараларының эшмәкәрлеге туктатылған. Ошо осорҙа Өфө ҡалаһының алыҫта ятҡан территорияларынан, биҫтәләренән (Яңы Максимовка, Затон, Йылҡыбай, Федоровка, Вотикеево һ.б.) граждандарҙан мөрәжәғәттәр ҙә килгән. Һөҙөмтәлә ғәмәлдәге 15 маршрутҡа төҙәтеүҙәр индерелеп, уларҙың ҡайһы берҙәре оҙайтылған, бәғзеләренең хәрәкәт юлы үҙгәртелгән. Бөгөнгә Затон биҫтәһендә проблема тулыһынса хәл ителгән, "Айгөл" биҫтәһе контролдә тотола. Махсус хеҙмәттәр граждандарҙың һәр мөрәжәғәтен иғтибарға ала. Ошо аҙна дауамында пассажирҙар транспорты тармағындағы хәл-торош тулыһынса тотороҡландырыласаҡ.

Артабан ҡала хакимиәте башлығы Өфө ойошмалары һәм ҡала территорияһында алып барылған эштәр менән танышыуын дауам итеүен белдереп, уҙған аҙналағы сәфәре йомғаҡтары менән таныштырҙы. "Ер һәм милек мөнәсәбәттәре идаралығында булып, ойошманың төп эшмәкәрлек йүнәлештәре менән таныштым. Дөйөм алғанда, муниципаль хеҙмәт күрһәтеү системаһы яйға һалынған, "Берҙәм тәҙрә" системаһы индерелгән, документтарҙы 18 урында ҡабул итәләр. Мин булғанда сират юҡ ине. Килгән кешеләр менән аралашып, уларҙан тик ыңғай фекерҙәр генә ишеттем. Ойошма көнөнә 300-ҙән ашыу кешене хеҙмәтләндерә. Хеҙмәткәрҙәр алдына шундай бурыс ҡуйҙым: урындағы бюджетҡа муниципаль милекте файҙаланыуҙан, ҡала ерҙәрен һатыуҙан, ҡуртымға биреүҙән килгән килемде арттырыу зарур. Шулай уҡ идаралыҡҡа үҙ эшмәкәрлегендә асыҡлыҡтың яңы кимәленә сығырға кәрәк. Бер генә гражданда ла, хоҡуҡ һаҡлау органдарында ла уларҙың эшмәкәрлеге һорау тыуҙырырға тейеш түгел. Әйткәндәй, республика Хөкүмәте менән һөйләшеп, Идаралыҡ алдында МФЦ-ның ике "тәҙрәһе" эшен тергеҙеү бурысы тора".

Шулай уҡ Өлфәт Мансур улы Архитектура һәм ҡала төҙөлөшөнөң баш идаралығы менән танышыуы тураһында ла бәйән итте, ойошманың технологик процестарҙы автоматлаштырыу системаһына эйә булыуы, әммә уның һуңғы йылдарҙа яңыртылмауына үкенес белдерҙе. "Был финанслауға бәйле мәсьәлә, - тине ул. - Хәлторошто яҡшыртырға һәм яңы кимәлгә сығырға кәрәк, сөнки ҡала төҙөлөшө - иң ҡиммәтле, хаталарҙы төҙәтеү ауыр булған тармаҡ. Шуға күрә, әле үк айырым бурыстарға, маҡсаттарға өлгәшергә кәрәк".

Бер мәл ҡала халҡының урамдарҙың яҡтыртылмауына зарланыуын иҫләйһегеҙҙер? Быйыл иһә был проблема Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын башҡарыусының иғтибар үҙәгендә. Ошо йәһәттән Өлфәт Мансур улы: "Быға тиклем төнгө 12-се яртынан иртәнге 6-ға тиклем экономия маҡсатында уттар һүндерелһә, хәҙер график төнгө 1-ҙән иртәнге 5-кә тиклем үҙгәртелде", - тип белдерҙе. Ҡала башлыҡтарына иһә урамдарҙы яҡтыртыу буйынса талаптарҙы тайпылышһыҙ үтәргә ҡушылды.

Оператив кәңәшмәнең төп темаһы булып ҡышҡы миҙгелдә янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса сараларҙың һәм махсус көстәрҙең әҙерлеге торҙо. Ҡала хакимиәте башлығы янғын һүндереү хеҙмәткәрҙәренә баҡсаларҙа, шәхси йорттарҙа йәшәүселәргә лә, уларға барыу юлдарының торошон да күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа ҡушты. Бигерәк тә төҙөлөш эштәре барған юлдаш-ҡасабаларҙы, вагондарҙа йәшәүсе төҙөүселәрҙе айырым контролгә алырға ҡушты.

Кәңәшмә һуңында Өлфәт Мансур улы ни өсөн объекттарҙы тапшырыу ваҡытының графиктан сығыуы, ремонт сифатының ҡәнәғәтләнерлек булмауы менән ҡыҙыҡһынды. Милекселәрҙән ошо йәһәттән ялыуҙар килеүе дауам итә. Былтыр улар 269 булһа, быйыл мөрәжәғәттәрҙең һаны 225. "Күрһәткестәр былтырғы менән сағыштырғанда бер үк кимәлдә. Ни өсөн алға китеш юҡ?" - тип, һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйҙы ҡала хакимиәте башлығы. Әммә әлегә ҡәнәғәтләнерлек яуап ишетелмәне. Баһа тағы ла икелеме?..

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҠЫҪҠАСА*

# КИЛӘСӘКТЕ ХӘСТӘРЛӘП...

✓ **Ҡала Советында хәбәр итеүҙәренсә, 2030 йылға тиклем Өфөнөң социаль-иҡтисади үҫтереү стратегияһы йәмәғәтселеккә фекер алышыуға сығарыла.** Документта биш блок: анализ, стратегик кәүҙәләнеш, өҫтөнлөклө йүнәлештәр, проекттар һәм 2030 йылға тиклем социаль-иҡтисади үҫеш прогнозы, Стратегияны тормошҡа ашырыуҙа идара итеүҙең ойоштороу-иҡтисади механизмы. Тәҡдимдәрҙе яҙма рәүештә 22 ноябргә ҡәҙәр gorsovet@ufacity.info почтаһына ебәрергә мөмкин. Һәр кем шаршамбы, 28 ноябрҙә, сәғәт 4-тә Ҡала мәҙәниәт һарайында асыҡ тыңлауҙарҙа ҡатнаша ала. Сығыш яһарға теләгәндәр ҙә сығыштарының тексын ебәрергә һәм паспорт күсермәләре менән үҙҙәренең шәхесен раҫларға тейеш. Стратегия ҡала халҡына 10-15 йылдан уларҙың, балаларының һәм ейәндәренең ниндәй шарттарҙа йәшәйәсәге, ә бизнесҡа нисек план төҙөргә, инвестиция һалырға, үҫешергә икенлеге хаҡында төшөнсә бирергә бурыслы.

✓ **2018 йылдың йәйендә Өфөлә уҙғарылған социологик тикшереү барышында төрлө йәштәге 1800 кеше үҙенең фекерен белдергән.** Улар төп проблемалар иҫәбендә халыҡтың йәшәү сифатының һәм килеменең түбән булыуын, эш урындарының юҡлығын һәм эшһеҙлекте, торлаҡтың ҡиммәтлеген, торлаҡ-коммуналь һәм медицина хеҙмәттәре сифатының түбәнлеген, транспорт инфраструктураһы торошо менән ҡәнәғәт булмауын атаған. Һорауҙарға яуап биргән өфөләрҙең 79,6 проценты - автомобиль юлдарының сифаты, 71,8 проценты - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренең тарифтары, 63,2 проценты - һыуҙың сифаты һәм 57,4 проценты ҡаланың экологик хәл менән ҡәнәғәт түгел. Халыҡтың 18 проценты ғына транспорт хеҙмәтләндереүе менән ҡәнәғәт. Өфөлә йәшәүселәр фекеренсә, улар сәнәғәтте үҫтереү һәм яңы эш урындары, уңайлы ҡала мөхитен булдырыу, социаль инфраструктура объекттары төҙөү, инвестициялар йәлеп итеү өсөн шарттар тыуҙырыу һәм туризмды үҫтереүҙе ҡала үҫешенең өҫтөнлөклө йүнәлештәре тип иҫәпләй.

✓ **Радий Хәбиров "Башҡортостан Республикаһында Яңы 2019 йылды байрам итеү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы.** Документҡа ярашлы республикала Яңы йыл шыршыһы 21 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа. Байрамға, ғәҙәттәгесә, уҡыу алдынғылары, олимпиадаларҙа һәм спорт ярыштарында еңеүселәр, төрлө фестивалдәр лауреаттары, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең, аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләрҙең балалары һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балалар саҡырыла. Улар өсөн Өфөлә өс көнлөк ял ойоштороласаҡ. Республиканың төп шыршы байрамында ҡатнашыусыларға Яңы йыл бүләктәре тапшырыла. Уларҙы шулай уҡ биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең балалары ала. Бынан тыш, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған етем, профессиональ белем биреү учреждениеларында белем алған балаларға матди ярҙам күрһәтергә ҡушылған.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәрҙе "Ҡыш бабайға хат" балалар республика проектында ҡатнашырға саҡыралар.** Өфөнөң "Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фонды" һәм Ҡыш бабайҙың йәшерен хеҙмәте хаттар ҡабул итә башланы ла инде. Проектта 3-15 йәшлек балалар ҡатнаша ала. Шарттар буйынса, улар Ҡыш бабайға хат яҙырға һәм 2018 йылда ниндәй изге эштәр башҡарыуҙары хаҡында хәбәр итергә, шулай уҡ Ҡыш бабайҙың йәшерен хеҙмәтенән махсус эштәрҙе үтәргә тейеш. Хаттарҙы башҡарылған эштәр менән бергә 2018 йылдың 23 ноябренә тиклем 450098, Өфө ҡалаһы, "Ҡыш бабайға хат" абонент йәшниге адресы буйынса йәки pismo-dedumorozu@list.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Шарттарға ярашлы, бүләк һорап яҙылған хаттар ҡаралмай. Конкурста изге эштәр тураһында бәйән иткән хаттар ғына ҡатнаша.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тырнаҡ бәшмәге ауырыуынан

❖ Хәҙер был сирҙән төрлө дарыуҙар рекламалайҙар. Әммә тиҙ арала унан ҡотолоп булмай. Тырнаҡ бәшмәге оҙайлы дауланыу талап итә. 150-шәр мг Флюконазолды аҙнаһына бер тапҡыр 2 айҙан 6-7 айға тиклем даими эсергә кәрәк. Аяҡтарҙы йыуып, зарарланған тырнаҡты ҡырҡып торорға һәм Клотримазол кеүек бәшмәккә ҡаршы крем һөртөргә. Таҙа ойоҡто бер семтем генә аш содаһы һалып кейегеҙ. Татлы, он ризыҡтарынан баш тартырға. Ошо кәңәштәрҙе теүәл үтәгәндә лә тәүге һөҙөмтәләр 3-4-се аҙнаның аҙағына күренер. Дауаланыу әҙәкһеҙ булырға тейеш!

### Яман шештән

❖ Яман шеш мәлендә тотош организмды нығытыу өсөн түбәндәге ысулды ҡулланырға була: 4-5 йыллыҡ алоэ үҫемлегенең япраҡтарын ҡырҡып алырға, йыуырға, сәнскеләрен алырға һәм ит турағыстан үткәрергә. 2 кг тирәһе алоэ килеп сығырға тейеш. Бынан алда алоэға 5 көн һыу һипмәҫкә. Шуға 3 кг бал, 2 шешә кагор (16-18 градуслы) өҫтәргә, яҡшылап болғатырға. Банкаларға тултырырға. Ҡара сепрәккә урап, 5 көнгә баҙға ҡуйырға. Аҙаҡтан ҡара төҫтәге шешәләргә ҡойоп, һыуытҡыста һаҡларға. Тәүге 5 көндә иртән 1-әр балғалаҡ, һуңынан 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы кәм тигәндә 2-3 аҙна, 1,5-2 ай дауаланһағыҙ, тағы ла яҡшыраҡ. Тәүге көндәрҙә үк ауырыуҙа аппетит барлыҡҡа килә. Был ысул менән үпкә туберкулезын, ашҡаҙандың сей яраһын, шулай уҡ психик тайпылыштарҙы, ҡандың хроник сирҙәрен, ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын, фалиждь, баш ауырыуын дауалайҙар. Профилактика өсөн ҡулланғанда 350 г алоэ, 600 г бал, 350 г шарап алырға.

### Радикулит

❖ Тигеҙ күләмдә йод менән глицеринды болғарға, умыртҡа бағанаһынан тыш бөтөн арҡаға һәм ауыртҡан ерҙәргә һөртөргә. Кизе-мамыҡ кейем кейеп, йоҡларға ятырға. Йылы итеп ябынмағыҙ. Дауаланыу өсөн 15 курс талап ителә, көн аша эшләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Ә бына башҡорт эпосында быңдай символик ғәмәл мәңгелекте, тыуған ерҙең изге булыуын раҫлай. Фәҡәт ул ғына мәңгелеккә лайыҡлы була ала. Айырым кеше йәки ырыу ғүмере быңдай мәңгелеккә дәғүә итә алмай.



ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ



Константин УШИНСКИЙ

# ҺӘР КЕМДЕҢ ҮҘ ТӘРБИӘҺЕ

Халыҡ тәрбиәһенең камиллығы тураһында һүҙ алып барғанда, ҡайһы бер һорауҙар тыуыуы ихтимал. Мәҫәлән, һәр халыҡтың үҙенә генә хас өҫтөнлөгө булған кеүек, үҙенә генә хас етешһеҙлектәре лә юҡмы ни? Ул етешһеҙлектәр халыҡ тәрбиәһе менән бергә һалынмаймы һәм уларҙы төҙәтеү сараһы күрелергә тейешме? Инглиздарҙың ныҡышмаллығын йәки французлдарҙың мәһ-айыусанлығын тәрбиә менән нығытыу ыңғай күренешме?

Иң тәүҙә шуны билдәләп үтәйек: үҙебеҙгә генә хас булған төшөнсәләрҙән, кешенең ниндәй булырға тейешлеге тураһындағы идеалыбыҙҙан сығып, ниндәй ҙә булһа халыҡ тураһында фекер йөрөтөргә, шул халыҡтың ыңғай йәки кире яҡтарын барлап, уларға баһа бирергә беребеҙҙең дә хоҡуғы юҡ. Айырым кеше, ниндәй генә юғарылыҡ яуламаһын, һәр ваҡыт халыҡтан түбән буласаҡ. Тарих беҙгә шундай фәһем бирә: үҙебеҙҙең шәхси фекерҙән сығып халыҡтың етешһеҙлеге тип баһалаған сифаттар йыш ҡына теге йәки был халыҡтың ыңғай яҡтарын тәьмин итеүсе төп һыҙат йәки тарихта башҡарған эшмәкәрлегенең сығанағы булып тора.

Шуға ла бөтөн халыҡтар өсөн дә уртаҡ тәрбиә ҡанундары юҡ, булыуы мөмкин дә түгел, мәҫәлән, немец педагогикаһы гел генә немец тәрбиәһенең теорияһы ролен башҡарасаҡ.

Һәр халыҡтың үҙенсәлекле тәрбиә системаһы бар һәм ул тәрбиә ҡанундарын бер-берендән "күсереп" алыу мөмкин түгел. Бер халыҡ та икенсе берәй халыҡтың өлгөһө менән йәшәй алмаған кеүек үк, тәрбиәнең сит ҡанундарын да, улар ни тиклем генә һәйбәт һәм төптән уйланылған булмаһын, үҙләштереп, ят педагогиканың алымдары ярҙамында балаларын тәрбиәләй башлай алмай. Был йәһәттән һәр халыҡ тик үҙ көсөнә генә иҫәп тоторға тейеш.

# БАЛАНЫ УҠЫТА БАШЛАУ

Баланы уҡыта башлаған саҡта уның үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға кәрәк: бәләкәй бала махсус шөғөлләнеүҙән тыш та бик тиҙ үҫешә һәм, мәҫәлән, алты йәшлек баланың бер-ике ай эсендәге күңел йәки физик үҙгәрештәре 10-15 йәштәге үҙгәрештәргә ҡарағанда нығыраҡ һиҙелә. Баланы ҡасан уҡыта башларға икәнен алдан әйтеп булмай, ул практикаға ҡайтып ҡала, ләкин ваҡытынан алда уҡыта башлауҙан һаҡ булырға кәрәк. Ваҡытынан һуңыраҡ уҡыта башлауҙың да кире яҡтары бар, ләкин ваҡытынан алда уҡыта башлауҙың кире эҙемтәләре күберәк.

Уҡырға өлгөрөп етмәгән баланы көсләп уҡыта йәки берәй фәнде аңларлыҡ йәшкә етмәгән көйө теге йәки был фәнде өйрәтергә тотонаһығыҙ икән, баланың бар булмышы, бар тәбиғәте быға ҡаршылашасаҡ. Был ҡаршылыҡтарҙы ваҡыт үҙе генә еңә ала. Әгәр ҙә һеҙ был ҡаршылыҡтар менән үҙаллы көрәшеп маташһағыҙ, балағыҙға тик зыян ғына килтерәсәкһегеҙ. Сөнки һеҙ унан мөмкин булмаған нәмәләрҙе талап итәһегеҙ: бала, һеҙҙе тыңлап, үҙенең тәбиғи үҫеш кимәленә ҡарағанда юғарыраҡ күтәрелергә тейеш була. Ләкин үҫештең һәр арауығы билдәле бер ваҡыт бирәмегенә тап килергә тейеш, беҙ иһә был процесты тиҙләтергә лә, яйлатырға ла тырышырға түгел, ә үҫештең һәр этабын тейешле булған рухи аҙыҡ менән тәьмин итергә тейешбеҙ.

**(Дауамы бар).**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

# ТАРИХЫБЫҘҘЫҢ...

## тере шаһиты ул

**Быйыл Санкт-Петербургта уҙғарылған иҡтисад форумында кинәт кенә каустик сода итеп эшкәртелеү ҡаралған Торатау яҙмышы хаҡында мәсьәлә ҡуҙғатылды. Был мәсьәләгә сит ил дини көстәренең емерткес ҡыҫылыштары, аҡса түләнгән экологтар ҡаршылығы һәм башҡа имеш-мимештәр телгә алынды унда. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошондай һүҙ ҡуйыртыуҙар араһында хаҡ һүҙ әйтер тарихсылар һәм этнологтар тауышы ишетелмәне. Ысынлап та, йәмәғәтселек аңында бер үк объект төрлө юҫыкта сағылыш табырға мөмкин. Бер яҡтан, Торатау - еңел генә ҡулға төшөрә алырҙай ҡиммәтле сеймал сығанағы, икенсе яҡтан, башҡорт халҡының мифик һәм тарихи мираҫының айырылғыһыҙ бер өлөшө. Ул ябай бер ландшафт өҙөгө түгел, ә башҡорттоң үткәненә ҡағылышлы ваҡиғалар ҡатнашсыһы һәм уның тере шаһиты ла.**



Әйткәндәй, социологияла бындай айырмалыҡтар йыш осрап тора. XX быуат баштарында социология фәненә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Вернер Зомбарт киң таралған әлеге ошо ике социаль тип - "батыр" һәм "сауҙагәр" төшөнсәләренә билдәләмә биргән. Быңдай классификация айырым кешеләргә генә түгел, милләттәргә лә ҡағыла, тип иҫәпләй ул. Сауҙагәрҙәр тормош алдына фәҡәт бер генә һорау ҡуя: "Һин миңә нимә бирә алаһың, тормош?" Улар өсөн кеше йә милләт тормошо - ни бары бер нисә уңышлы йә уңышһыҙ сауҙа ғәмәле. Ул ғәмәл кем менән башҡарыла - башҡа кешеләр, дәүләттәр әллә яҙмыш менәнме - быныһы мөһим түгел. Мөһиме шул: быңдай сауҙа матди етешлек, уңайлыҡ һәм үҫә барған ҡулланыу ихтыяжын тәьмин итеүсе ҡиммәттәрҙән торған килем генә килтерһен. Ахыр сиктә, иҡтисади мәнфәғәт кешелек йәшәйешенең бөтөн мәсьәләләрен ҡамшап китә.

"Батыр" шулай уҡ тормошҡа үҙ һорауын бирә, тик ул былайыраҡ яңғырай: "Мин һиңә ни бирә алам, тормош?" Әгәр сауҙагәр үҙе аҙыраҡ биреп, күберәк алырға теләһә, "батыр" иһә үҙен изге ғәмәлдәр атҡарыуға арнай. Уның тормошоноң төп асылы - үҙен ҡорбан килтереү. Тик быңа нимә хаҡына? Халыҡтар ижадында беҙ быға бер төрлө генә яуап таба алмайбыҙ. Европа халыҡтары эпостарында "дуҫың өсөн" үлемгә дан йырлана. Төрки халыҡтарҙа ырыуҙаштар өсөн үлеү мәртәбә булһа, һуңғыраҡ варианттарҙа хаким өсөн үлергә, тип әйтелә. Ә башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосында ағыуланған батыр үҙен ҡотҡараһы урынға, тере һыуҙы әйләнә-тирәгә бөркә. Башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында тере һыу тирә-йүнгә бөркөлмәй, ә һәләк булған батырҙарҙы терелтеүгә тотонола. Ә быңа башҡорт эпосында быңдай символик ғәмәл мәңгелекте, тыуған ерҙең изге булыуын раҫлай. Фәҡәт ул ғына мәңгелеккә лайыҡлы була ала. Айырым кеше йәки ырыу ғүмере быңдай мәңгелеккә дәғүә итә алмай. Башҡорттоң тағы ла "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында ла төп персонаждарҙың береһе ҡылған гонаһтарының язаһы сифатында мәңгелек ғүмер йөгөн тартырға мәжбүр ителә.

Боронғо тарихты һөйләп, бөгөнгөгә төбәү ниндәй генә булһа ла мифтың төп мәғәнәһен тәшкил итә. "Урал батыр" күрһәткән идеаль үлем өлгөһөнә артабан башҡорт егеттәренең күп быуындары эйәреп, үҙҙәрен тыуған ере хаҡына ҡорбан итте. Һәм, киреһенсә, күп кенә төрки күсмә халыҡтары эпосы үҙ ырыу-ҡәбиләнде генә һаҡлап ҡалыу идеяһын үткәрә, сөнки күсмә тормош өсөн ерҙе биләп йә тартып алырға ла була.

Башҡорттар өсөн иһә тыуған ер әһәмиәте шул тиклем бөйөк икәнлеген шунан да күрергә була: ихтилалдар ваҡытында улар дошмандары ҡәберлектәрен юҡ итергә ынтылған. Революцияға тиклемге тарихсы Владимир Витевский 1735-1740 йылдарҙағы баш күтәреүҙәр мәлендә ҡәберлектәрҙе емереүҙәр, мәрхүмдәрҙең һөйәктәрен бырғатыу һәм яндырыуҙар хаҡында йәне көйөп яҙа. Әммә башҡорттар өсөн ер биләмәһенә хужа булыуҙың ундағы зыяраттар менән раҫланыу фактын тарихсы, күрәһең, белмәгәндер. Ә бит был йәһәттән башҡорттар ғына шулай фекер йөрөтмәгән. Бөйөк Пушкин урыҫ аңындағы ошо уҡ хәҡиҡәтте үҙенең шиғыр юлдары аша әйтеп биргән:

Два чувства дивно близки нам,  
В них обретает сердце пищу:  
Любовь к родному пепелищу,  
Любовь к отечественным гробам.

Боронғо эпик мәғәнә бөгөнгө башҡорттар өсөн ниндәй дәрәжәлә көнүҙәк һуң? Социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, халыҡтың төп йәшәү ҡиммәттәре үҙгәрмәгән.

XX быуат аҙаҡтарында Өфө вуздары студенттарына "Теге йәки был этнос вәкиле булыуҙың төп күрһәткестәре нимәлә?" тигән һорау бирелгәйне. Анкеталарҙа яуап варианттары күрһәтелгәйне: тел, мәҙәниәт, этник биләмә һ.б. Башҡорттарҙың күпселеге "Төп маркер - биләмә, Тыуған ил", тип яуап бирҙе. Ә Башҡортостанда йәшәгән башҡа милләт вәкилдәре араһында бындай яуапты биреүселәр ике тапҡырға һирәгерәк булып сыҡты.

XVIII быуатта уҡ әле академик ғалимдар билдәләүенсә, башҡорттарҙан башҡа бер генә халыҡтың да убалар, ҡаялар, шишмәләр, урмандар һәм башҡа ваҡ географик объекттар хаҡында шул тиклем күп һандағы хикәйәттәре һәм риүәйәттәре юҡ. Хатта йылға яры ла ниндәйҙер тарих сағылдырыусы бер нисә атамалағы ҡатнашкаларға бүленә. XVIII быуаттың 70-се йылдарында академик Петр Паллас былай тип яҙған: "Башҡорттарҙың бәләкәй һәм ҙур тауҙарға, бөтөн шишмәләргә һәм бәләкәй генә ҡушылдыҡтарға, уйһыуҙарға, саукалыҡтарға һәм бөтөн башҡа урындарға ла атама биргән исемдәре бик күп..." Ысынлап та, бөгөнгө этнографтар ҙа башҡорттарҙың йылға ярындағы ҡаяларға һәм текә ярлауҙарға шул ерҙәрҙән осоп төшөп һәләк булған кешеләрҙең исемдәре менән атау кеүек боронғо ғәҙәттәрен белә. Уларҙың ер-һыу атамаларында ғәҙәти булмаған ваҡиғалар тарихын сағылдырыу ғәҙәте оҙаҡ ваҡыттар дауам иткән. Ундай атамалар көндәлек ҡәҙимгә тормош ағышына ниндәйҙер көтөлмәгәнлектең килеп инеүен һүрәтләгән. Учалы (үс алды), Атингән, Атһуяр, Бирмәсбаш, Урыҫкүнгән, Саптарүлгән, Әбейаурыған, Ҡортатау, Ҡортүлгән, Талашты топонимдары башҡорттарҙың ошондай ваҡиғалар тарихын ер-һыу исемдәрендә һаҡлап ҡалыуҙы кәрәк тип табыуын белдергән. Бындай генеалогик һәм хәл-ваҡиға хикәйәтенән ошо ерҙең мифологик картаһы хасил булған һәм уның тәғәйенләнеше атама-адрес йүнәлешенән генә ғибәрәт булмаған. Башҡорттар тауҙарға айырыуса хөрмәт менән ҡараған. Милли мифологияны өйрәнеүсе билдәле этнограф Зәкирйән Әминев әйтеүенсә, тау - ул ҡәбилә биләмәһенең сакраль үҙәге булып тора. Һәр ҡәбиләнең үҙенең шундай тауы булған, башҡорттар унда яҙ һайын доға ҡылырға йыйыла торған булған. Ҡәбилә ерен сакраль һаҡлаусы булып, ғәҙәттә, тау баштарына таштан һалынған йә өйөп яһалған бағана рәүешендәге ҡарасҡылар (һаҡсылар) хеҙмәт иткән. Улар тик башҡорттар тарафынан ғына эшләнә торған булған һәм шул урындағы тау, ер-һыу эйәһенә бағышланған. Ошо урындарҙа йыл һайын аяттар уҡып, ҡорбан салыу йолалары башҡарылған.

Әбына Торатау иһә бөтөн башҡорт халҡы өсөн дә изге иҫәпләнгән. Рәсәй Фәндәр академияһы адъюнкты Иван Лепехин 1770 йылда Башҡортостанда булғандан һуң тауҙы хөрмәтләү унда нуғай хандарының торағы булыу менән бәйле, тигән фекергә килгән. Шулай ҙа "нуғай хан" тигән һүҙбәйләнеш ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәй, сөнки Нуғай урҙаһында хандар түгел, ә бейҙәр, йәғни кенәздәр идара итә. XVIII -XIX быуаттарҙа башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылырҙан алда был крайҙа булған бөтөн хакимдарҙы ла нуғай хандары тип атаған. Иван Лепехин яҙыуынса, Торатау тағы ла шуның өсөн изге иҫәпләнгән: ул мосолман әүлиәләрен үҙенә һыйындырған. Һүҙ бында суфый шәйехтәренең Аллаға табыныу урындары итеп тау башында аулаҡ урындар һайлау йолаһы тураһында бара.

Лепехин яҙып ҡалдырыуынса, тәүҙә башҡорттар уны Торатауға алып барыуҙан баш тартҡан. Улар тауға бынан алда бирелгән вәғәҙәләрен үтәгән осраҡта ғына күтәрелә ала, тигән сәбәпкә һылтанғандар. Лепехин аҙмаларында әйтелеүенсә, уны тау битләүенә тиклем дә бик теләмәйенсә генә оҙатып килгәндәр. Юлдаштары академикҡа аныҡ миҫалдар нигеҙендә тауға күтәрелеү уның ғүмере өсөн хәүефле булыуын, бынан алдараҡ татарҙар менән фажиғәле тамамланған шундай ике тарих тураһында һөйләгәндәр. Әлеге икөү башҡорттарҙың "һармаҡлығынан" көләү өсөн генә тауға күтәрелергә булған. Берәүһе "әлеге изге урынға" менеп, үҙенең "бысраҡ эшен башҡарып" төшкән һәм күп тә үтмәй, уның бөтөн ырыу-нәҫеле ҡырылған. Икенсеһен айыу өҙгөләгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, адъюнкт бер нисә башҡортто өгөтләп ризалатыуға өлгәшә. Тау һырты һәҙәк булыуға ҡарамаҫтан, 15 тапҡыр туҡтап, ял итеп алырға тура килде, тип яҙа Лепехин. Тауҙың ин түбәһендә оҙонса түнәрәк булып йәйелгән киң майҙан хасил була. Лепехин һүҙҙәренсә, унда йәҙләгән башҡорт өйөн урынлаштырып булыр ине. Ғалим һүрәтләүенсә, көньяҡ, һәҙәк яғынан 1770 йылға ҡәҙәр ҙә әле тауға менә торған махсус юл ғына түгел, һаҡлағыс валдарҙың ҡалдыҡтары ла һаҡланып ҡалған булған. Лепехинды оҙатып йөрөгән башҡорттар Торатау түбәһен ҡаплаған үҫемлектәрҙе лә хатта изге тип иҫәпләгән. Лепехин шунда үҫеп ултырған артыштың бер нисә ботағын гербарий өсөн һындырып алырға ынтылһа ла, башҡорттар махсус йола башҡарыуҙан тыш уны өҙөргә рөхсәт итмәгән. Улар ғалимға артыштың бөтөн төрки халыҡтарҙа ла яуыз көстәрҙе ҡыуа торған үҙенсәлеге барлығы тураһында һөйләгән. Бынан тыш, уға төньяҡлап тауҙың текә яғы битләүендә ниндәйҙер нуғай ханының хазиналары йәшерелгән мәмерйә барлығы тураһында һөйләгәндәр. Ваҡытында был алтынкөмөштәрҙе ике дөйәгә тейәп алып килгәндәр, имеш, ләкин был хазина суфый шәйехтәренең береһе тарафынан сихырланған. Шуға күрә лә был хазинаға юл бикле һәм ул сит күҙҙәргә күренмәй. Ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла Лепехин был мәмерйәгә төшөп, ҡаяның ситенә тиклем килеп етә, ләкин унда шул минутта уҡ кинәт ҡойоп яуа башлаған ямғырҙан йәшенер урындан башҡа бер ни ҙә тапмай.

Шулай ҙа Лепехиндың башҡорттарҙан ишеткән "ошо тау хаҡында "Сыңғыҙнамә" китабында бик күп нәмә яҙылған" тигән хәбәре ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Һүҙ бында XVII быуаттың "Дәфтәр-и- Сыңғыҙнамә" тип аталған билдәле әҙәби ҡомартҡыны хаҡында бара. Был ҡомартҡының башҡорттар араһында бик ныҡ таралған булыуы тураһында Владимир Даль яҙып ҡалдырған: "Башҡорт халҡы борон-борондан ырыуҙарға, йәғни беҙ уны улыстар тибеҙ, бүленгән. Һәр улыстың, йәғни ырыуҙың үҙ ораны, үҙ тамғаһы, ағасы һәм ҡошо булған, һәм башҡорттар ышаныуынса, бөтә был билдәләрҙе уларға Сыңғыҙхан үҙе тәғәйенләп бүләп биргән..."

Был "Дәфтәр-и- Сыңғыҙнамә" әҙәби ҡомартҡыһының башҡортса вариантында бәйән ителеүенсә, Торатау янында Сыңғыҙхан нәҫеленән булған Добун Мәргәндең әсәһе Гөльямалик Күрекле йәшәгән. Шулай итеп, башҡорттар үҙҙәрен Сыңғыҙханға әсәһе яҡлап туғанлыҡтары булыуын раҫлай. "Дәфтәр-и- Сыңғыҙнамә" буйынса, бер туған ағайҙары Сыңғыҙхандың бөйөк империя төҙөү юлындағы төп дошмандары була. Әсә яғынан туғанлыҡ ептәре күренекле башҡорт әһелдәренә власть өсөн көрәшкә хоҡуҡ бирмәгән. Ләкин был туғанлыҡ ептәре Сыңғыҙханға монгол ырыуҙары араһында хакимлыҡ өсөн барған көсөргәнешле көрәшендә таяныс була. Әле үҫмер генә Сыңғыҙхан уны үлтерергә ниәтләнгән ағаларынан йәшеренергә мәжбүр булған ваҡытта буласаҡ хакимдың әсәһе башҡорттарҙың ырыу башлыҡтарына ярҙам һорап мөрәжәғәт итә лә инде. Асылда, "Сыңғыҙнамә" авторы раҫлауынса, башҡорт ырыу башлыҡтарының әүҙем ҡатнашлығынан тыш, Сыңғыҙхан бер ваҡытта ла монгол ҡәүемдәре башлығы була алмаҫ ине, һәм империя ла булмаҫ ине.

"Сыңғыҙнамә"лә Торатау хаҡында бәйән ителгәндәрҙе мифология өлкәһенә ҡайтарып ҡалдырырға ла булыр ине, ә бына Торатауҙың Сыңғыҙхан нәҫелдәре менән бәйләнешен дәлилләгән XVII быуат сығанаҡтарын нисек аңларға? Әхмәтзәки Вәлиди Себер хандары һәм солтандарының Урта Азия хакимдары менән яҙышҡан хаттарын тапҡан, унда Торатау Себер ханы Күсемдең ейәне Әбләй Гәрәйҙең даими тораҡ урыны рәүешендә телгә алына. Әбләй Гәрәй был ваҡытта Өфө менән Томск араһындағы үҙ биләмәһен кире ҡайтарыу өсөн Мавераннахрҙан (Урта Азияла тарихи өлкә) хәрби ярҙам алырға өмөтләнгән була. Уның ғәскәрендә Урал аръяғы башҡорттарының Табын, Һеңрән һәм Терһәк ырыуҙары төп көстө тәшкил иткән. 1635 йылда ул Өфө ныҡытмаһы янындағы ауылдарға көтмәгәндә һөжүм менән ябырыла һәм Рәсәй хакимиәте яҡлы булған башҡорт ырыуҙары башлыҡтарын юҡ итә. Ләкин ул үҙе лә Өфө дворяны Федор Каловский отряды тарафынан әсиргә алына һәм Мәскәүгә оҙатыла.

1735 йылда, башҡорттар хөкүмәттең Ырымбур ҡалаһы төҙөү ниәтенә ҡаршы сыҡҡан ваҡытта, Торатау янында Морат солтан килеп тораҡ ҡора. Был сыңғыҙлы 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы башлыҡтарының береһе, Торатау биләмәһендәге ерҙәрҙе иңләгән Юрматы улысы башҡорто Килмәк Нөрөшов тарафынан саҡырыла. Морат туранан-тура Күсем нәҫеленән була. Уның атаһы Дүсәй солтан тарихҡа Ҡараһаҡал исеме менән инергә насип булған Байбулат солтандың ағаһы була. Морат бөтөн көньяҡ Башҡортостандан 8 меңләп ғәскәр туплауға өлгәшә. 1735 йылда ул Килмәк Нөрөшов менән бергә Иван Кирилов һәм Александр Румянцев етәкселек иткән ғәскәрҙең Орь йылғаһы тамағына хәрәкәтен тоткарларға тейеш була. Ырымбур экспедицияһы ҙур юғалтыуҙарға дусар ителһә лә, башҡорттарға сигенергә тура килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**1735-1740 йылдарҙа Торатау итәгендә һуғыш һәм солох мәсьәләләре ҡаралғанда, хандар саҡырылғанда, енәйәтсе һәм хаиндарға ҡарата ҡарарҙар сығарылғанда бөтөн ырыуҙар йыйындары ошонда үтә.**

**Тарихыбыҙҙағы һуңғы 100 йыл беҙҙең өсөн изге булған нәмәләрҙе юҡҡа сығарыу, ҡомартҡыларҙы туҙҙырыу һәм тормош мәғәнәһе хаҡында уйлап көсөргәнмәү кеүек үкенесле миҫалдар менән тулы булды. Әле килеп еткән "сауҙагәрҙәр" заманы ла "Нимә хаҡына үлергә лә әҙерһең?" тигән һорауҙы көн тәртибенән алып ташларға итә. Эйе, фәҡәт изге маҡсаттар менән рухлана алыусы батырҙар ғына үҙ-үҙен ҡорбан итеү һәләтенә эйә була ала...**

**Булат АҘНАБАЕВ,**
**тарих фәндәре докторы,**
**профессор.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ

## Боронғо төркиҙәр донъя ағасы тураһында

Донъя күсәре, уның үҙәге тирәләй төрлө объекттар урынлаштырылып, йыһан структураһы төҙәлә. Шундай үҙәк сифатында донъя ағасы (алтын төҫлө ҡайын) йә, "Кан-Кес" тигән героик хикәйәттәге кеүек, донъя тауы күрһәтелә: "Был тауҙарҙы бутағыс, ә һыуҙы һүмес менән бүлгеләгән саҡ ине, тулҡынланып, аҡ диңгеҙ аҡты, армытланып, алтын тау ҡалҡты".

Донъяның вертикаль структураһында урталыҡ, өҫ һәм аҫ булып, ул донъя ағасы (донъя тауы) образында тулы сағылыш таба: уның төрлө тарафтары тәбиғәттәге һәм йәмғиәттәге төрлө кимәлдәге күренештәргә тап килә. Өҫ яҡ - ағастың ботаҡтары, һауа, тау үре, йондоҙҙар, йылға башы, ҡоштар, өҫкө донъя. Аҫ яҡ - ағастың тамырҙары, мәмерйә, тарлауыҡ, һыу, өң яһап йәшәүсе һәм мөгөҙлө хайуандар, аҫҡы донъя. Урталыҡ - ағастың олоно, үҙән, кеше һәм йылы тынлы хайуандар.

Төркиҙәрҙә донъя ағасы итеп "изге ҡайын" ҡабул ителгән. Эпик әҫәрҙәрҙә донъя ағасының варианты рәүешендә тирәк ағасы йышыраҡ осрай. Төркиҙәрҙең донъя аңлайышында ағас уның төҙөлөшөн булдырыусы башланғыс рәүешендә һүрәтләнә. Был образ ярҙамында йәшәйештең бөтә өлкәләренең вертикаль буйынса бәйләнеше асыла. Ағас донъяның күсәре һәм үҙәге булып тора. Ваҡыт һәм арауыҡ координаталары өсөн башланғыс нөктә ролен дә донъя ағасы үтәй. "Донъя ағасы", "күк ағасы", "тормош ағасы" аша төркиҙәрҙең байтаҡ ҡына мифологик инаныстары, мәҫәлән, тормош башланғысы, тыуғанға тиклем һәм үлгәндән һуң кешенең ҡайҙа булыуы кеүек ҡараштары асыҡлана. Боронғо һундар бейек ағас күктә йәшәүсе төп илаһ Тәңре менән бәйләнешкә инеү мөмкинлеген бирә, тип иҫәпләгән. Ҡол Ғәлиҙең "Киссаи Йософ" поэмаһында ла "тормош ағасы" үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. Бында күп тармаҡлы һәм бейек "ырыу ағасы" образы әҙәби алым рәүешендә ҡулланыла. Был ағас та Тәңре менән бәйле булып сыға. Бейек һәм тарбағай ботаҡлы "көббә ағасы" аҫтында яраткан улын һағыныуҙан алйып-тилмереп ултырған Яҡубҡа күктән тауыш ишетелә, шул рәүешле уға улы менән осрашыу ваҡыты хәбәр ителә.

Төркиҙәрҙең ҡараштарына ярашлы, ағас ырыу-ҡәбилә тормошо менән тығыҙ бәйләнештә тора. Төрки халыҡтары фольклорында ағас балаларҙы ашатып үҫтереүсе итеп һүрәтләнә, ул тормош символы һәм ырыу ағзаларының йәшәү ҡото итеп һанала. Әгәр ағасты тамырҙары менән йолҡоп алһаң, ошо ағас менән "туғандаш" кешеләр ҙә йәшәүҙән мәхрүм буласаҡ. Тормош ағасының ботаҡтарында тыуасаҡ балаларҙың сәңгелдәктәре эленеп тора. Тимәк, ағас үҙе лә кешегә йән биреүсе тәбиғи көс рәүешендә күҙаллана.

Күккә "сәйәхәт" ҡылыусы ҡамдар, тормош ағасының тармаҡтары аша үтеп сығып, һауаға күтәрелә ала. Донъяның мифопоэтик концепцияһына ярашлы, һыу баштары өҫтән, күктән ағып төшөп, тормош ағасының ботаҡтарын барлыҡҡа килтерә.

**Рафаэль БӘҘӘРТИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Бына мин, мәҫәлән, ҡорбан була белгән зат нәҫеленән. Был һыҙат миңә ата-бабамдан бирелгән. Атайымдың ағалары Әмир, Гәрәй Ҡарамышевтар халҡыбыҙҙың батырҙары исемлегендә.***

# БӘЙҒӘМБӘРЛЕКТӘН ҠАЛА

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы

**Ҡыйыу фекерле шағирә итеп беләбеҙ уны. Зыялы, әүҙем, рухлы шәхес итеп. Интернет киңлектәрендә төрлө мәсьәләләргә ҡарата һалған төплө яҙмалары уҡ апайҙың юғары аң кимәлен аңғарта. Ә көндәлек тормошта ул ниндәй? Түбәндәге әңгәмә, моғайын, ошо һорауҙың яуабын асыҡлағандай итер.**

**Таңһылыу апай, беҙ һеҙҙе ижадығыҙ аша бик ҡыйыу кеше итеп беләбеҙ...**

- Шулай тойола ғына ул, асылда, миндә ҡатын-ҡыҙға хас булған бөтөн тойғолар ҙа бар. Ҡурҡам да, илайым да, үпкәләп тә китәм, бушҡа көлөп тә алам. Ә инде ҡыйыулыҡҡа мин йәшәй-йәшәй, ҡағыла-һуғыла, ауыҙ-мороном ҡанай-ҡанай өйрәндем. Бала саҡта иһә бешмәгән генә ҡыҙ булдым ул. Хатта бәләкәс һеңлем Гөлсәсәктән дә туҡмалып ҡала инем. Өләсәйем йыуашлығыма көйөп китеп: "Һуҡ шул ҡәсәр ҫуҡҡырҙың үҙенә, йәмшәйеп илап торғанса", - тип әрләй. Әммә мин ҡайтарып һуға белмәйем. Мәктәптә лә, урамда ла шулай булдым. Сөнки өләсәйемдең бик иркә генә ҡыҙы инем.

Бөгөнгө йәшәйештә, бигерәк тә беҙҙең милли йәшәйештәге әүҙемлегемде "ҡыйыулыҡ" тип түгел, ә бары намыҫлы булыу, тип атар инем. Минең туған телемә, милли ҡиммәттәремә ҡурҡыныс янағанда нисек итеп өндәшмәй боҫоп ятайым? Ярай, мин оло кеше, ярай, миңә ҡалай ҙа бара, тип үткәрәм икән көндәремде, ары ул ҡурҡаҡ намыҫ менән нисек ғүмер итергә? Ҡыйыулыҡ - ул үҙ-үҙеңде нимәлер өсөн ҡорбан итергә әҙер булыу, тигәндә лә аңлата. Әгәр беҙ яратҡан, үҙебеҙ ынтылған төшөнсәләребеҙ өсөн ҡорбан булыуҙан, шәһит китеүҙән ҡурҡабыҙ икән - еңеүгә өлгәшә алмабыҙ. Мәҫәлән, тарихта артыҡ төпкә китмәй генә, автономия яулаусы батырҙарыбыҙҙы ғына хәтерләйек. Улар үҙҙәрен ҡорбан итеүҙәрен аңлай-белә тороп был юлға барғандар бит. Бына мин, мәҫәлән, ҡорбан була белгән зат нәҫеленән. Был һыҙат миңә ата-бабамдан бирелгән. Атайымдың ағалары Әмир, Гәрәй Ҡарамышевтар халҡыбыҙҙың батырҙары исемлегендә. Төпкәрәк төшкәндә инде, Мөхәмәтйософ Ҡарамышев - Йософ майор тигән исем менән ҡалған ул тарихта-губернатор Перовскийҙың ғәскәрендә Һырдарья буйҙарында Аҡ мәсет ҡәлғәһен алыуҙа ҡатнашҡан. Уны 35 йәшендә генә ағыулап үлтерәләр.

Олатайым Солтангәрәй Ҡарамышевтың улдары заманында үҙ көстәре менән мал көтөп, ер эшкәртеп, хәлле генә йәшәгәндәр. Аҡтар яҡлы ла, ҡыҙылдар яҡлы ла булмағандар. Граждандар һуғышына бөтөнләй ҡаршы торғандар. Һәм уларҙы, олатайымдың биш улын да, "контрреволюционер" тип, совет осороноң тәүге концлагерына - Архангел крайы Холмогорск ҡалаһына һөргөнгә ебәрәләр. Ундағы ауыр эштән, аслыҡтан ҡырылалар бер-бер артлы, бары атайымдың атаһы Шәңгәрәй олатайым ғына тере ҡайта. Ҡайтҡас та әле Сталин репрессиялары тынғы бирмәй. Был юлы Шәңгәрәйҙең ҡатыны булған Зәйнәп өләсәйемде Томск өлкәһенә оҙаталар. Олатай балаларын алып, ҡатыны артынан китә. Һәм Сталин үлгәс кенә улар берәм-берәм тыуған яҡтарға ҡайтып төшәләр.

Беҙ тарихһыҙ быуын булып үҫтек. Беҙгә атайҙарыбыҙ, йәки уҡытыусыларыбыҙ халҡыбыҙ тарихын һөйләмәне. Сөнки ысын тарихты һөйләү тыйылғайны. Беҙ совет осоронон яһалма тарихын өйрәндек. Хәтеремдә, бер мәл атайым ашығып ҡайтып инде, һарыҡ салды, беҙгә һалма ҡырҡырға ҡушты, өйҙә йыйыштырҙыҡ. Ҙур ҡунаҡ килә, тине. Беҙгә шунда Себерҙән һөргөндән ҡайтҡан атайымдың ике туған ағаһы Әхмәтгәрәй Сәйетгәрәй улы Ҡарамышев килде. Ул һөргөн срогын тултырып ҡайтҡан икән. Шунда улар атайым менән төнө буйы һөйләшеп ултырҙылар. Өй бер бүлмәле генә, һигеҙ кеше йәшәйбеҙ. Мин төнө буйы кемдәрҙе ҡасан төрмәгә ултыртҡандар, кемдәрҙе нисек алып киткәндәр, кемдәр нисек үлгән икәне хаҡындағы хәбәрҙәрҙе тыңлап яттым. Беренсе тапҡыр атайымдың шундай мәғлүмәттәрҙе белеп тә, беҙгә бер ауыҙ һүҙ һөйләмәгәненә хайран булып яттым. Тәүге тапҡыр туғандарымдың фажиғәһенә шаһит булдым. Аҙаҡ миңә был олатайҙың ҡулъяҙмалары ҡалды, уларҙы әкренләп кенә эш итеп ултырам. Унда Маҡар ауылы тарихы, шул заман кешеләренең яҙмыштары бар. Ошо туғандарымдың фажиғәле тарихы хаҡында поэма ла яҙҙым. Шунан килеп, нисек мин ҡурҡаҡ була алайым?..

**Рубрикабыҙ "Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы" тип атала. "Сыраҡтар" тигәндә, һеҙ нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ?**

- "Сыраҡтар" - ул, минеңсә, күңелде ҡараңғылыҡтан ҡотҡарып килеүсе шәмдәр, йәғни, илһам сығанаҡтары. Улар бала саҡтан уҡ ҡабыҙылып, береһе һүнһә, икенсеһе балҡып, һине алға әйҙәй, тип уйлайым. Быны минең сыраҡтарым - һөнәрҙәрем. Һөнәргә, ғәҙәттә, бала саҡта өйрәнәһең. Бала саҡта сигеү сигергә яраттым. Сигеү менән мауығыуым студент булғас туҡталып торҙо, ҡорама ҡороуға бирелеп киттем. Әле лә ташламағанмын был шөғөлдө. Заманында тағы ла бер һөнәргә өйрәнергә тура килде. Дүртенсе синыфта уҡығанда атайым лотереялар алып ҡайтып, һәр бер балаға исемен яҙып таратып биргәйне. Минең лотереям "Подольск" тигән тегеү машинаһы отҡайны. Минең машинкала тегенеүемде күреп, бер саҡ баҙарҙа һатыу иткән күрше ҡатын бүректәр тегеп бирергә тәҡдим итте. Был шөғөлөм миңә мул ғына аҡса эшләргә ярҙам итте.

Тағы бер мауығыуым, ҙур бер илһамым булды. Беренсе-икенсе синыфтарҙа уҡытҡан уҡытыусым Мәрхәбә апай Миндеғолова оҫта мандолинасы ине. Мин шул музыка ҡоралына, моңона хайран ҡалдым хәҙер. Илап-илап тороп атайымдан мандолина алып биреүен һорайым. Ахырҙа, ул уны һатып алды. Шул мандолинаны тотоп, синдек башына менеп ултырам да үҙем белгәнсә сиртәм, тырышып-тырышып көйҙәр сығарам. Өйрәткән-аңлатҡан кеше юҡ. Өйҙә тыңҡылдарға рөхсәт итмәйҙәр, баштарын ҡаңғыртам ололарҙың. Урыным шул - солан башы. Бармаҡтарымды күперсетә торғас, өйрәндем бит.

Икенсе курста уҡып йөрөгәндә, Коммунистик урамынан "Мелодия" магазины алдынан үтеп барам. Ҡараһам, витринала скрипка тора. Инеп, шул ҡоралға сәғәттәр буйына ҡарап торам. Уйнап ҡарағым килә бит! Нимә икәнлеген яҡшылап аңламаһам да, шунда көй сығарғы килә. Ә мин бит инде алдыма алғанды ҡуймай торған кеше, стипендиямды йыйып, барып алдым тегене. Бүлмәләштәрем Рәмзилә Хисаметдинова, унан тағы ике рус ҡыҙы аптырап киттеләр. Быларҙы карауатҡа теҙеп ултырттым. Һыҙҙырып ебәрәйем тиһәм... тауышы сыҡмай. Ҡалайтырға белмәйбеҙ. Рәмзилә әйтә: "Уны майлайҙар шикелле ул", - ти. Бер көрөшкә һары майҙы иретеп, тасылдатып майлап ташланыҡ. Тағы уйнап ҡарайым, тайыпшыуып тора был, әммә тауышы юҡ. Мәшәҡәтләнә торғас, кис булды, ҡыҙҙар ялҡты, йоҡларға ятты. Мин скрипкамды тотоп, коридорға сығып киттем. Ултырам ҡайғырып тәҙрә төбөндә. Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов үтеп бара. "Нишләп ултыраһың төндә?"- тип һорай. "Бына, боҙоҡ скрипка һатып алғанмын", - тим илай яҙып. Ул алып, ҡулында бер-ике әйләндерҙе лә, кәрәк урындарын тарткылап-борғолап, еңел генә уйнаны ла ебәрҙе. Шунан мин дә өйрәндем уйнарға. Тик минең музыка ҡоралдарына булған һөйөүем уның менән генә туҡтаманы әле. Кейәүгә сыҡҡас, ауырлы көйө йөрөгәндә, эй, гармунда уйнағы килә бит. Ауылға ҡайтҡас, ҡустымдың баянына тотондом хәҙер. Шуны көндәр буйына тысҡылдатам. "Корһаҡлы көйө юҡ менән булышаһың, хәҙер атайың ҡайта - оят", - тип өләсәй ороша. Уларҙан ҡасып, мунсаға сығып китәм. Тәки өйрәндем уйнарға...

**Ә шулай ҙа һеҙҙең иң яҡты сырағығыҙ - ул ижад бит инде, шулаймы?**

## Мин дә шуға аҙ ғына булһа ла

- Шулай, әлбиттә. "Бәйғәмбәрлектән ҡала шағирлыҡ" тип әйтәләр икән, шуға аҙ ғына булһа ла тап килергә тырышам. Тәүге шиғырымды туғыҙынсы синыфта уҡығанда яҙып ҡараным. Мәктәбебеҙгә Мөнир Ишбулатов тигән күрше ағай уҡытырға килде һәм әҙәби түңәрәк ойоштороп ебәрҙе. Юнир Салауатов менән шул түңәрәккә яҙылдыҡ. Ағайыбыҙ шул саҡ әлеге сыраҡты тоҡандырғандыр инде. Минең Мөнир ағайҙы тәүге тапҡыр тыңлағандан һуң уҡ шиғырҙар яҙғым килеп китте. Йүгереп ҡайттым да, шәм тотоп (әле ауылда ут юҡ), карауат аҫтына инеп яттым. Ҡусты-һеңлелерем ҡамасауламаһын өсөн селтәрле япма аҫтына йәшенеп, илһамланып ижадҡа тотондом. Бер дәфтәр итеп яҙҙым да ҡуйҙым шиғырҙы. Уны "Салауат йәшәй" тип исемләп ҡуйҙым әле. Шул шиғырҙы стена гәзитендә сығарҙылар. Районға командировкаға килгәнендә Тайфур Сәғитов ул шиғырҙы үҙе менән алып китеп, "Урал" гәзитендә баҫтырҙы. Ары Сәләх Кулибай уларҙы "Башҡортостан" гәзите редакцияһына алып килгән, Рәшит Шәкүр менән Рәми Ғариповҡа уҡытҡан. Ағайҙар был шиғырҙы тотоп, баш мөхәррир Зиннур Нурғәлинға кергәндәр. Шулайтып, минең карауат аҫтында яҙған шиғырҙарым ошолай ҙур яҙмышлы булып, хужабикәһен ижад донъяһына осортоп алып инеп китте...

Бөгөн мин кәйлә тотоп, таш та ватмайым, көрәк тотоп, ер ҙә ҡаҙмайым, мин ҡәләм тотоп ижад итәм. Был минең ғүмеремдең аҙағына тиклем оҙата бара торған һөнәрем. Үҙемде заман шағиры ла тимәйем, бер ниндәй сик-биктәргә ярашлашмайым, аҡыл һатам да тимәйем, бары намыҫыма, выжданыма ҡаршы бармай, күңелем теләгәндә яҙа торған әҙибәмен. Йыһат Солтанов ҡулайлаша торған шағирҙарҙы "ҡорһаҡйәндәр" тип атай торғайны. Мин был һүҙҙән асылын һәр саҡ иҫемдә тоттом. Аллаға шөкөр, бер ваҡытта ла ҡорһағым теләгән намыҫым теләгәнде еңеп китмәне. Азат булдым һәр ваҡыт...

**Һеҙ - совет осоро балалары. Әлбиттә, ниндәй генә осорҙа үҫһә лә, һәр кем бала сағын яҡты, нурлы итеп хәтерләй. Һеҙҙе шәхес итеп тәрбиәләүҙә мәктәптең роле ниндәй булды?**

- Ул осорҙа беҙ атай-әсәйҙеке генә түгел, йәмғиәттең дә балалары булдыҡ. Мине мәктәп тә, ауылдаштарым да тәрбиәләне. Шул заманыма рәхмәтле булып "тәрбиәләне", тигән һүҙҙе ғорурлыҡ менән әйтә алам.

Мәктәп күп нәмәгә өйрәтте беҙҙе. Бала саҡта синыф менән фермаға һыйыр һауырға ла йөрөнөк. Ә өләсәй беҙҙе өйҙә бер эш тә эшләтмәй үҫтерҙе. "Мин үлгәс эшләрһегеҙ", ти ҙә ҡуя ине. Юнир Салауатов (ул артисты барығыҙ ҙа беләһегеҙ) класташым булды минең, шуның менән фермаға китәбеҙ. Уның әсәһе алдынғы һауынсы. Юнир белә бит инде минең һыйырға яҡын барған бала түгеллегемде. Ҡыҙыҡ итергә булған был мине. Һүҙгә әүрәтеп алып барып, күрәләтә үгеҙҙең аҫтына ултыртҡан. Ә мин уның хәбәренә әүрәп барып, ул күрһәткән мал аҫтына сүгәләнем дә, һауайым тип ҡулдарымды һонһам - елен юҡ. Ятып көлә был хәҙер. Ул ғына түгел, бөтөн класташтар көлә. Был хәл бар ауыл халҡына билдәле булды. "Үгеҙ һауған Таңһылыу" тип атап та йөрөнөләр. Шулайтып, мәсхәрәгә ҡалып ҡуйһам да, ҡулдарымды ҡабарта-ҡабарта, телемде арҡыры тешләп, һауырға өйрәндем һыйырҙы. Төркөм алып, ун һигеҙ һәүкәште һауҙым әле.

Концерттар әҙерләп, район буйлап гастролдәрҙә йөрөй торғайныҡ мәктәптә уҡығанда. Әҙәбиәт дәресенән драмалар үтелһә, шуларҙы сәхнәлә уйнап ҡына "әтмиткә" ала алабыҙ. Шул ваҡытта минең актриса булыу теләге уянды. Тик мине был хыялымдан әлеге бергә уйнап, бергә уҡып үҫкән дуҫым Юнир Салауатов төңөлдөрҙө. "Таңһылыу, һин ҡалай ғына шәп уйнаһаң да, шиғыр ятлаһаң да, бейеһәң дә, һине актриса итеп алмайҙар", - ти был миңә. "Нишләп?"- тейем. "Үсекмәйһеңме һуң?" - тип һорай. "Юҡ, үсекмәйем", - тим. "Буйың бәләкәй. Шундай бәләкәй генә актриса булмай инде", - ти был миңә. Ысынлап, мин бәләкәй генә бит инде. Ошо бәләкәйлектән ҡыҙыҡ хәлдәр сығып ҡына тора ине. Йәш саҡта йәйҙәрен баланы әсәйемә ҡалдырып киткеләй торғайным. Бер ҡайтһам шулай, балам мине танымай - оноҡтан. Ҡаҡашып бөткән, хас ауыл балаһы булып уйнап йөрөй. Өләсәһе: "Гәүһәр, ана бит әсәйең ҡайтҡан", - ти. Был бала миңә ҡарап торҙо ла: "Ыста, шулай бәләкәй әсәй буламы?"- тип китте лә барҙы. Шулай бәләкәй генә ҡыҙыҡай, бәләкәй генә әсәй, бәләкәй генә шағирә булып йәшәнем. Ярай, "бәләкәй" тиеүҙәре бүстәк, иң мөһиме, "йөрәге бәләкәй" тимәһендәр.

Ә инде мәктәп темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, бөгөнгө быуындан айырмалы рәүештә, беҙ мәктәп алдында ҙур яуаплылыҡ тойҙоҡ. Уҡытыусыларға ҡарата оло хөрмәт, мәктәп милкенә һаҡсыл ҡараш, мәктәп тәртибенә буйһо-

***✓ Был һынауҙар миңә тап ана шул табынға һәм табаҡҡа һыя белмәүемдән, һәр нәмәгә үҙ ҡарашым һәм фекерем булыуҙан бирелде. Эш урындарымдан шулай китергә риза булһам да, иң төп эш урынымдан - ижадтан китмәнем.***

# ШАҒИРЛЫҠ, ТИҘӘР.

## тап килергә тырышам...

ноу бар ине. Әммә бөгөнгө мәктәп системаһын да камһетергә теләмәйем. Бөгөн дә мәктәп балаларҙы яҡшыға һәм белемгә өндәй бит. Бары замандың идеологияһы, кешеләрҙең ышаныу, ынтылыу маҡсаты ғына үҙгәргән.

**Өләсәйегеҙҙе йыш телгә алаһығыҙ. Ул һеҙҙең өсөн ҙур абруй булған ахыры ғаиләлә?**

- Өләсәйле булыуҙың бәхетен күрҙек беҙ. Дүрт ҡыҙ, бер малайбыҙ. Иртәнсәк өләсәм тыпылдатып һөйөп уята, сәй ҡайнатҡан, ризыҡтар бешергән. Килеп итәгенә һалып тороп иркәләтә. Таҡмаҡ әйтеп бейетә, бармаҡ шартлатып әүрәтә. Орошоуы ла үҙенсә бер төрлө, тейеш итеп ҡабул ителә торған әр, бер ниндәй үпкә уятмай. Тәрбиәһе лә эргәһендә генә. Бына шул өләсәй тулыһынса беҙҙе ҡараны, һәр беребеҙҙең өҫ-башын ентекләп тәүәлләп, тамағыбыҙҙы ҡайғыртып, иркәһаҙын өләшеп йәшәне. Шул тиклем тәмле итеп бешерҙе, тәмлетамаҡ итеп бөткәйне. Тик беҙгә өйрәтмәне. Ҡыуа ла сығара ине аш бүлмәһенән. Һәр хәлдә, бөгөн дә аш-һыуға осталығым юҡ. Бала саҡта шулай, бауырһаҡ бешерәм, тип, аласыҡта ултырған бер биҙрә йомортҡаны, бер табаҡ майҙы ҡушып, ҡамыр баҫтым. Унда шәкәр ҙә өҫтәнем. Бешергән нәмәм ҡып-ҡыҙыл булып өтөлөп-янып бөттө. Иҙән ҡалманы буялып, мейес плитәһе ҡалманы. Өләсәй ҡайтып инеп, хайран булып, "Бер биҙрә йомортҡамды, бер табаҡ майымды..." тип һамаҡлай-һамаҡлай таҙалап алды. Үҙе бешереп ашатты шунан, тик күрһәтмәне. "Көнө килһә, башыңа төшһә, былай ҙа өйрәнерһең", ти ҙә ҡуя ине. Шулай әпәүләне ул беҙҙе. Ә үҙе ул әсәйебеҙҙең үҙ әсәһе лә булмаған икән, быныһын үҫкәс кенә белдек, әсәйебеҙҙе тәрбиәгә алып үҫтергән булған. Ә ҡандай оло йөрәкле, аҡыллы, тәрбиәле булды ул.

Атай ҡатылыҡ күрһәтте. Яуаплы булған эштәрҙе бүлеп бирә. Мал ҡарау, мал аҫтын таҙалау, һыу алып килеү, утын ташыу кеүек ауыл балаһы белә торған һәр эшкә ҡушты. Хужалыҡтағы, ғаиләләге бөтөн һорауҙар тик уның аша ғына хәл ителә ине. Әсәйем һәр ваҡыт уның янында һәм уның ышығына ғына торҙо. Бына ҡалай дөрөҫ ҡоролған боронғо ғаиләләрҙәге тәртип. Өләсәй ҡыҙын хәленән килгән тиклем балалар һәм көнкүреш мәшәҡәтенән ҡотҡарған һәм ҡатын булараҡ иренә иғтибар бүлергә форсат биргән. Бер ваҡытта ла ир менән ҡатын араһына кермәгән, ә, киреһенсә, уларҙы бер бөтөн итеп, теҙгенде уларға тоттороп, үҙе ейәндәренә бауыр баҫҡан. Борон ололар шулай аҡыллы, сабыр булып, тормоштан, яҙмыштан уҙып китергә ынтылып бармағанға ла, уның ҡул аҫтындағы ғаиләләр татыу булғандыр, тием.

**Һеҙҙең шағирҙар табынында, табағында үҙ урынығыҙ бармы?**

- Мин артыҡ табынға ла, табаҡҡа ла һыйған кеше түгел ул. Был хаҡта үҙемдең дә уйланғаным бар. Әммә холҡомдо нисек кенә шелтәләһәм дә, йөрәгемдең хаҡлы булыуына иманым камил.

Заманында үҙем ойошторған баҫмалар "Йәшлек"тән дә, "Шоңҡар"ҙан да китергә тура килде. Был һынауҙар миңә тап ана шул табынға һәм табаҡҡа һыя белмәүемдән, һәр нәмәгә үҙ ҡарашым һәм фекерем булыуҙан бирелде. Эш урындарымдан шулай китергә риза булһам да, иң төп эш урынымдан - ижадтан китмәнем. Был өлкәлә позицияларымды тотоп ҡала алдым.

Хеҙмәт юлымды мин "Башҡортостан ҡыҙы" журналында башланым. Университетты бөткәс, Кәтибә Кинйәбулатова менән Рәми Ғарипов мине шунда эшкә саҡырып алдылар. Әммә оҙаҡ эшләй алманым. Тәүге репрессиям тап шунда башланды ла инде. Рәми ағай Ғариповты баҫмаҡлаған сағы ине властарҙың. Редакция коллективы, өлкә комитет хужалары йыйылып, ағайыбыҙға "милләтсе" тамғаһы тағып, эштән сығарҙылар. Шунда, протест йөҙөнән, мин, Фәүзиә апай Рәхимғолова, Миңлебикә Йәрмөхәмәтовалар ҙа ғариза яҙҙыҡ. Ошо хәлдән һуң йылға яҡын мине бер ҡайҙа ла эшкә алманылар. Ҡайҙа барһам да "Ул - милләтсе, милләтсе Рәмиҙе яҡлай", тигән хәбәр оҙата йөрөнө. Ахырҙа, Рәми ағай үҙе матур итеп ҡылыҡһырлама яҙып, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына Әкрәм Бейешовҡа ебәрҙе. Әкрәм ағай "Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге" тигән секторға кесе ғилми хеҙмәткәр итеп эшкә алды. Был да миңә ҙур мәктәп булды. Тап ошонда эшләгәндә һүҙ мәғәнәһен аңланым мин. Хатта шағир булып тыумағанда ла, был хәтлем һүҙҙәр байлығы менән эш иткәндән һуң шағир булып китергә мөмкин ине.

Шиғриәттә илһам шишмәм ул минең - "Урал батыр" эпосы. Ғүмер буйы мин был ижадты аңларға, төшөнөргә, яңынан-яңы аң-балҡыштарын асырға тырышам. Төбөнә төҙ ҡуйырға тырышам. Әҫәрҙәге фәлсәфә мәңге тотоноп бөтөп булмаҫ байлыҡ ул...

**Таңһылыу апай, һеҙҙең шәхси тормошоғоҙ тураһында бер ерҙә лә бер ниндәй мәғлүмәт юҡ. Шағирә булараҡ, шәхес булараҡ, уҡыусыларығыҙ һеҙҙең менән таныш та, ә хисле ҡатын-ҡыҙ булараҡ һеҙҙең тормош бөтөнләй бикле. Бәлки, асылыңығыҙ бөгөн?**

- Эйе, мин шәхси тормошомдо һәр саҡ йәшерҙем, журналистарға түгел, хатта яҡындарыма ла һөйләп барманым. Сөнки барыһы ла ал да гөл генә булманы. Кешеләрҙең үҙ ҡайғы-хәсрәте лә еткәндер, ни эшләп мин уларға зарымды түгеп ултырам әле, тип уйланым һәм барыһын да үҙ эсемдә ҡалдырып өйрәндем шулай. Башҡорт ҡатындарының ғорурлығы ла баштан ашҡан бит инде. Уртында ҡан булһа ла тышҡа төкөрмәйһең. Һөйләһәм дә, тик бәхетле мәлдәремде генә һөйләнем һәм яҙҙым.

"Күҙ нурым" тигән йырҙы ишеткәнең бармы? "Һин ураған юлды мин урайым" тигән юлдар бар? Был шиғырҙы мин Байназарҙа уҡығанда Салауат тигән егеткә арнап яҙғайным. Ул минең үҫмерлек мөхәббәтем булды, иң саф йәшлек хистәрем. Ул да миңә ғашиҡ ине. Университетҡа уҡырға ингәс, уның менән бер генә тапҡыр осраштыҡ. Виләсәпит менән килеп алып, яр буйында һөйләшмәй генә ултырҙыҡ. Айырылышҡанда уның:



"Таңһылыу, һин студент булдың инде, мин, моғайын, ябай ауыл кешеһемендер. Юлдарыбыҙ ошолай бүленәме икән инде?" - тип әсенеп әйткәнен хәтерләйем. Унан егет армияға алынды, хаттар яҙҙы. Ауылда хәбәр тиҙ йөрөй бит инде. Әсәйемә почтальон апай Салауат менән хатлашыуымды әйткән. Әсәйем: "Аһ-аһ! Әсәһе Ҡарамышовтар ҡыҙы бит уның! Туғаның даһаң!"- тип бот сапты. Был минең өсөн йәшен атҡан шикелле тәьҫир итте. Ҡалайтһам да иттем, әммә йөрәгемдән был һөйөү гөлөн төбө-тамыры менән йолҡоп аттым.

Һуңғараҡ, университетта уҡығанда, минең етди һәм үкенесле мөхәббәтем булды. Был хәлдә минең тиҫтерҙәремдең барыһы ла белә, йәшерен-батырыны юҡ. Арабыҙҙы бутаусылар бик нығыт тырышты һәм беҙ ташлашып ҡуйҙыҡ. Мин быны ауыр кисерҙем. Йөрәгем әйтеп аңлатҡыһыҙ ярағa дусар булды. Һөйләшә, ашай алмай, түшәмгә ҡарап яттым. Шундай матур яҙ мәле, тәҙрәләр асыҡ, муйыл, сирень еҫтәре аңҡый, ә мин йәшәүҙән ваз кисеп ятам. Рәмзилә әрләй: "Шағирҙар ғашиҡ булһа, шиғыр яҙырға тейеш, ә һин тик ятаһың..."- ти. Был ныҡышып торғоҙҙо мине, көҙгөгә алып килгәйне - йөҙөм һап-һары. Һағыштан һарғайыуҙың ысын икәнлеген аңланым шунда. Һыу буйына төштөк әхирәтем менән, оҙаҡ итеп ағымға ҡарап ултырҙыҡ. Шунда мин аҡҡан һыуға һалып, ниндәйҙер ауырлығымды ағыҙып ебәргәндәй булдым. Шунан бер аҙ баҫылып, асылып киттем. Әммә ул кешене онота алманым.

Был хәлдән һуң мин бер фекергә килдем: үҙем яратҡанға түгел, ә мине яратҡан кешегә кейәүгә сығам, тинем. Ҡыҙымдың атаһы етенсе синыфтан алып минең артымдан йөрөгән егет ине. Армияға тиклем бер Маһинур тигән ҡыҙҙарҙың өйөндә осраҡлы ғына тура килгәндә, ул ишектән инеп, миңә шаҡ ҡатып тексәйеп торҙо ла, үтеп китеп, тәҙрә төбөндәге гөл сәскәһен өҙөп тоттороп киткәйне. Шул егет минең ғазаплы мөхәббәт ауырыуынан сығып етә алмаған сағымда килеп тапты, тәҡдим яһаны. Мин уға асыҡтан-асыҡ әйттем, яратырға вәғәҙә итә алмайым, тинем. Ул шул шартҡа риза булды. Тик беҙ ғүмергә бергә була алманыҡ, алты йыл йәшәп айырылыштыҡ. Ирем яйлап эсә, ҡул күтәрә башланы һәм мин балаһы бындай мөхиттә үҫтерергә теләмәнем...

Ошо тәңгәлдә, үҙем яратмаһам да, мине яратҡанға сығам, тигәндең эҙемтәләрен әйтеп китмәксемен. Ир кеше үҙе нисек кенә яратһа ла, уға ул ғына етмәй. Ул мотлаҡ ҡатындан да һөйөү талап итәсәк. Ул инде өйләнгән ҡатынының һөйөүен яулау юлдарын уйлап тормаясаҡ, ә ул хистәрҙе талап итеп, ҡурҡытып, кәмһетеп алып була икән, тип кенә уйлаясаҡ. Ир кешегә һинең хөрмәтле ҡарашың, иғтибарың ғына аҙ, уға ҡатынының йәне-тәне менән бирелгән булыуы зарур, күрәһең. Тормош тәжрибәһе һәм йәшәйеште күҙәтеүҙән сығып әйтәм мин быларҙы.

Ир менән йәшәгәндә, минең бәхетһеҙлегем бының янында, тип уйлай инем. Әммә айырылғас та бөтөнләк тойғоһон тоя алманым. Уны уйланым, йәлләнем, нимә ашап, нимә кейеп йөрөй икән, тип ҡайғырҙым, үҙемде өҙгөләнем. Депрессия башланды. Ошо халәт минең бер ун йыллап ғүмеремде алып китте. Ярай әле эшем булды, ҡыҙым булды, шулар мине ҡотҡарҙы, алға этәрҙе.

Артабанғы йәшәйештә мин ир-егеткә күтәрелеп ҡараманым. Кисергән бәхетһеҙ мөхәббәтем, уңышһыҙ ғаилә тәжрибәм минең күңелемдә башҡа бер кемгә лә урын ҡалдырмағайны. Булған көсөмдө, энергиямды хеҙмәткә, балама, ижадҡа һалдым.

**Ҡыҙығыҙҙы ла үҙегеҙҙең ижади һөнәрегеҙ юлынан әйҙәгәнһегеҙ, ахыры...**

- Гәүһәр мәктәпте бөткәс, мин уға филология факультетына уҡырға инергә тәҡдим иттем. Ул шунда: "Һинең кеүек көнө буйы гәзит сығарып, ҡайтҡас та шул гәзиттең хаталарын эҙләп ултырғым килмәй",- тип ҡырҡа баш тартты. Тарих факультетына инде был. Уҡып бөттөләр, кейәү балаҡай Туймазы районына алып ҡайтып китте хәҙер ҡыҙҙы. Туймазы ҡалаһында эш тапмай йөрөй торғас, был бала ваҡытлыса ғына гәзиткә эшкә урынлашып торҙо. Һәм шул мәлдән гәзиттә эшләй. Бөгөн ул Туймазы район-ҡала гәзиттәре берләшмәһенең директоры. Район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, "Ағинәйҙәр" ҡорон ойоштороусы. Ике ейәнсәремде лә башҡортса һөйләштереп үҫтерҙе, ауыҙ тултырып "өләсәй" тип торалар. Бик ризамын, бик ҡәнәғәтмен балаларымдан... һәм яҙмышымдан да.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тел һәм милләт мәсьәләләре буйынса әле оҙаҡ ҡына һөйләштек шағирә менән. Ҡайҙа нисек сығыш яһауҙарын, телмәрен кемдәр нисек ҡабул итеүен, бөрйәндәрҙең айырым психологияһы һәм башҡалар хаҡында ла фекер бүлештек. Оло ғорурлыҡ менән тыуған ауылы Байназар ағинәйҙәре бүләк иткән түшелдереген күрһәтте, китаптарын бүләк итте. Шул мәл мин милләт өсөн хеҙмәт иткән һәм күңелендә үҙе бер тарих йөрөткән оло быуын вәкилдәренә тейешле иғтибар бүлмәүебеҙҙе аңланым. Ә бит улар белгәндәр һәм кисергәндәре ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә. Мәҫәлән, бына Таңһылыу апай Ҡарамышеваның ҡырҡ сырағы - үҙе бер китаплыҡ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ошо саҡта кисерҙем уларҙы: ирен ятҡа биргән ғорур әсәйемде лә, балаларының әсәһенә хыянат иткән атайымды ла, беҙҙе атай наҙынан мәхрүм иткән Мөршиҙә апайҙы ла. Тәҡдирҙәр, тинем. Еңел булып ҡалды һымаҡ...***




...Атайымды йәнә бер күреүем хәтеремә уйылған. Уныһы инде ҙурайғас. Тәүгә ғашиҡ булып йөрөгән саҡ, осоп-балҡып, йүгереп өйгә ҡайтып индем. Дөрөҫөрәге ишек алдына, йылға яғынан, арттағы ҡапҡанан. Ихатала ҡулға-ҡул тотоношоп торған атайым менән әсәйемде күреп, тағы осоп барып атайымдың ҡосағына сумыр инем. Ниҙер туҡтатты. Ҡулымдан тотоп туҡтатты һәм ҡоймаға ышыҡландырҙы.

- Ләйләгөләм! Бер генә көн, бер генә төн өйөмдә булырға рөхсәт ит инде! - Атайымдың ялбарыулы тауышы. "Әлбиттә! Бер генә көнгә түгел, бөтөнләйгә ҡал!" - тип әйтер ҙә әсәйем, тағы ла әүәлгесә бергәләп йәшәп алып китербеҙ! Донъябыҙ теүәлләнер!

- Телгеләмә йөрәгемде, Йәнтимер! - Әсәйем ҡорос сыңы сығармаһа, Ләйлә булмаҫ. Бәй. Ниңә Ләйләгөл тине әле. Анау ваҡыт, өйҙән сығып киткән йылда, мине оҙатҡанда ла шулай тигәйне, ҡайтҡас һорашырмын тинем дә, онотҡанмын. Һорарға кәрәк онотмаҫ борон! Әсәйемдең тауышы минең уйҙарымды бүлә. - Инде уңалған яраларҙы ҡуҙғатып, ниңә килдең?! Һөйләштек бит инде! Мин дә тынысландым, балалар ҙа онотто! Үҙеңде генә түгел, уларҙы ла уйла!

- Эй, Ләйләгөләм! Уйламай тиһеңме ни?! Ҡалайтыйым һуң тәҡдиремә шулай яҙғас! Уны ла ташлай алмайым, һине лә онотоп булманы... Был йөрәк нисек түҙә икән икегә ярылмай!

- Минеке күптән ярты инде, - әсәйем моңһоу ғына арыған тауыш менән яупланы. - Ике кешене яратып булғанына ышанмайым... Мин һиңә фатиха бирҙем. Ризалаштым. Әйҙә, йәшә, бәхетле бул!

- Һинең бәхетһеҙ булыуыңды күреп, нисек мин бәхетле булайым?!

- Кем бәхетһеҙ? Юҡ, мин бәхетле! Һәр хәлдә һинән бәхетлерәк! Минең балаларым янымда. Улар мине ярата. Мин уларҙы ташламаным. Уларға хыянат итмәнем.

- Тимәк, мин уларға ла хыянат иткәнмен?

- ?!

- Ләйләгөл, һин ысынлап шулай тип уйлайһыңмы ни? Юҡ, мин дә уларҙы яратам! Шул ике ғәзизем өсөн йәнем өҙөлә...

- Үҙең һайлаған яҙмыш... Кемгә үпкәләйһең?

- Белмәйем. Бер йөрәккә ике һөйөү биргән яҙмышымалыр, бәлки...

Йәшенгән урынымдан сығып, атайымды ҡоса алманым. Улар ныҡ итеп ҡосаҡлашты ла, өнһөҙ генә айырылышты...

Кис көнө әсәйемдә истерика башланды. Ҡустым менән уны тыя алмай алйыныҡ. "Үтә ҡыҙылдар тиҙ уңа, беҙ алһыуҙары ғына..." тип әллә нисәнсе ҡабат элек атай менән йырлаған йырын йырлап ултырҙы-ултырҙы ла, күҙенә күренгән әйберҙәрҙе алып ташлай башланы. Китап-журналдар, кейем-һалым, буянғыстар осто, нимәлер ватылды...

- Алһыу, алһыу имеш! Алһыу булғас ниңә ундың?! Ҡыҙыл булғанһың, тимәк, ҡып-ҡыҙыл булғанһың! Тиҙ уңдың! -Сәскәһе-ние менән көршәк тейеүҙән көҙгө селпәрәмә килде.

Ошо ватылыу ғына уны әҙерәк айнытты шикелле. Ике яҡлап ҡулына аҫылынған икебеҙҙе ҡосаҡлап сүгәләп ултырҙы ла илай башланы. Һөйләнә-һөйләнә оҙаҡ тыныслана алманы әсәйгенәм. Шунда белдем уның исеменең Ләйләгөл икәнен. Ғүмер буйы кеше Ләйлә тигәс, һорашып та ҡарамағанбыҙ. Атайым да тәүге тапҡыр әйтте бит, элек гелән йә матурым, йә алтыным, йә Ләйлә тип кенә йөрөткәнен. Ләйләгөләм имеш...

Был юлы инде ысынтылап үпкәләнем атайыма. Кластағы иң матур, иң шаян егеткә күҙем төшөп йөрөгән миңә ике кешене яратыу башыма һыйманы. "Алдаҡсы! Һин бер кемде лә яратмайһың!" - тип тылҡып, эстән талаштым атайым менән. Һәм күңелем ҡатты. Быға саҡ һағынып, йөрәгем әрнеп юҡһыныуым әллә ҡайһы мәлдә генә юҡҡа сыҡты ла, урынына күрә алмау тулды ла ҡуйҙы. "Яратмайым! Күрә алмайым!" - тип яһилланды кескәй йөрәгем...

... Йыл артынан йыл үтте. Күптән әсәймен. Күптән һөйөклө ҡатынмын. Әсәйемдең бер бөртөк Тамсыгөләмөн. Туйыма атайҙы саҡырттырманым. Әсәй көсләшеп ҡараны ҡарауын. Ҡаратырышлығым еңде, һүҙемде һүҙ иттем.

Хәҙер мин инде үҙем теге саҡтағы әсәйем йәшендәмен. Ҡырҡҡа табан үрләйем. Минең дә ике ҡыҙым үҫеп килә. Алтмышты артмаҡлаған әсәйем һаман да еңел генә кәүҙәле, ит тә ҡунманы, ҡалынайманы ла. Ошоғаса эшләп тә йөрөнө.

- Ҡыҙым, хәлем бөттө. Эштән сығып ҡайттым, - тине бер көн. - Йәштәргә урын, балатырға ял кәрәк. Кеше күҙенә төшкән сүп булып йөрөмәйем әле. Ял итәйем.

Ике көн өйҙә генә булды. Бөтөн урын-ерҙе ҡырып таҙалап сыҡты. Аҡларын аҡланыҡ, яңыртырын яңырттыҡ.

Өсөнсө көнөнә иһә аптыратырлыҡ һүҙ әтте.

- Маратҡа, атайыңа шылтырат. Иртәгә үк килеп етһендәр. - Минең ҡарашымдағы һорауҙы уҡып төшөндөрҙө. - Хушлашырға ваҡыт.

Ҡысҡырып көлөп ебәрҙем дә, әсәйемдең ҡарашын күреп, шып туҡтаным. Йөрәк "терт" итте. Дөрөҫ!

- Шаяртмайым. Һиндәге һиҙгерлек ҡайҙан, кемдән тиһең? Мин дә һиҙәм: күп ҡалманы.

Иҫем аҡылым ҡороһа ла, атайымды ла, Марат ҡустымды ла аптыратып, йәһәт кенә ҡайтыуҙарын үтендем. Шәхси эшҡыуар булып киткән Маратыбыҙ текә сит ил машинаһында елдереп ҡайтып инде. Атай ҙа тәгәрмәсле икән, тик үҙебеҙҙеке. Классика.

Улар килгәндә әсәй урында ине инде. Бер көн эсендә көсөн һурҙырып алғандай шиңеп ҡалғайны. Доктор булараҡ (Әсәйем мине бер тапҡыр ҙа врач та, табип та тимәне, тик доктор тип кенә һөйләне) мин дарыуҙарын да бирҙем, уколдарын да һалдым. Бушҡа ғына...

- Бәхетлемен, иң ҡәҙерле өс кешем янымда, - тине ул шаугөр килеп уйнап йөрөгән ейәндәрен хисапламай ғына. - Һеҙҙе күреп тә туя алманым. - Оҙаҡ ҡына һәр беребеҙгә төбәлеп ятты. - Яратып та туя алманым. Бигерәк тә һине, Йәнтимер... Үлеп яраттым мин һине... Шул яратыуымдан ҡурҡып, яратмағанға һалыштым. Шул ҡәҙәре бәхеттең ғүмерлек булмаҫын, бер көн килеп юҡҡа сығырын алдан белеп, юрый һалҡынлыҡ күрһәттем. Тупаҫ ҡыландым, ҡырыҫ өндәштем. Әйтерһең, шулайтып ҡына Аллаһы Тәғәләне алдап була! Ысынлап та үтә ҡыҙыл булмайыҡ та, тиҙ уңмайыҡ тип шөбһәләндем. Шуға ла әлеге йырҙы йыш йырланым "Үтә ҡыҙылдар тиҙ уңа, беҙ алһыуҙары ғына..." Ҡыҙыл булманым, уңманым, ғүмер буйы бер кеше - һинең өсөн өҙөлдөм...

Әсәйемдең өҙөп-өҙөп һөйләүенән йөрәк алҡымға тығыла. Күҙҙән йәш субырҙай.

- Әсәй, бәлки беҙгә сығып торорғалыр?! Атай менән генә һөйләшерһегеҙ ...

- Юҡ, - ти ҡаты итеп. - Был һүҙҙәрҙе әйтергә ғүмер буйы тартындым. Инде лә үҙем менән алып китмәйем, һеҙгә ҡалдырам... Әгәр һеҙҙе бәхетһеҙ итеп, атай наҙынан мәхрүм итеп үҫтерһәм, кисерегеҙ берүк... Мин ризамын. Барығыҙҙан да ризамын. Бәхетле булығыҙ! Минең өсөн дә йәшәгеҙ!

Һәр беребеҙҙең ҡулын һыйпап, тын ғына ятты әсәм. Әсәкәйем. Тын ғына китеп тә барҙы... Хатта ышана ла алманыҡ. Өс көн элгәре йүгереп йөрөп эшләгән, алтмышын яңы үткән әсәйгенәм...

Атай бер һүҙ өндәшә алманы. Башын аҫҡа эйәгән килеш оҙаҡ ултырҙы. Иламаны ла. Беҙгә күтәрелеп тә ҡараманы.

Төштән һуң ҡайтып китте һәм кискә "семерка"һына прицеп тағып йәнә килеп етте. Прицебында тимерҙән һырлап, матурлап эшләнгән ҡәбер рәшәткәләре, ярым айлы һәйкәл дә булыуы аптыратты. Сөнки унда әсәйемдең бик матур фоторәсеме ине. Ҡасан өлгөргәндер?

- Алдан әҙерләп ҡуйғайным, - тине атай өнһөҙ һорауыбыҙға. - Үҙемә лә әҙер. - Бөгөнгә ҡайтам. Иртәнсәк ерләшергә килермен.

Тағы оҙаҡ текләп ултырҙы ул әсәйемдең һулыған йөҙөнә. Нимәләр уйлап, нимәләр кисерҙе икән шул минуттарҙа? Ғәфү үтендеме, үкендеме? Намыҫы йөрәген өттөмө икән? Был һорауҙарға бер ҡасан да яуап табылмаҫ инде.

Иртәнсәк атай килмәне. Әсәйҙе матур табутҡа һалып, мәҙәниәт һарайына алып киттеләр. "Ҡала халҡы хушлашырға теләй", - тине түрә абзый. Ә беҙ өйҙә ҡалдыҡ, атайҙы көтөп, ингән бер кешегә текләй-текләй күҙебеҙ талды. Әллә өйгә һуғылмай, тура ҡәбер ҡаҙыусылар янына киттеме? Юҡ, унда ла килмәгән тинеләр.

Төшкә ҡарай өй телефоны телгә килде.

- Апай, был Морат, - тине ят ир тауышы. - Ғәфү итегеҙ, атайым... ерләшергә... бара алмай!

- Ах һин...

- Ғәфү итегеҙ, - тип бүлдерҙе егет. - Зинһар тыңлап бөтөгөҙ. Атайым, атайыбыҙ ... кисә кис китеп барҙы бит. Бөтөнләйгә...

- Нисек китеп? Ҡайҙа? Нимә булды? Әллә үҙ-үҙенә...

- Юҡ, юҡ, - тине тауыш ашығып. - Кискелеккә малдарҙы бикләгән дә, арбаһына ултырып ҡына мәрхүм булған... Йөрәге туҡтаған. Бөгөн уны ла ерләйбеҙ, апай...

Күҙ алдына йомро ғына уҫтарын һуҙып "Апай, апай" тип торған бала, Марат ҡустыма ике тамсылай оҡшаған малай килеп баҫты: "Уйди, мой брат дома! Ты не мой брат!" Күҙ алдымда ике малай - Морат менән Марат - өйөрөлөргә керешә һәм мин йәнә упҡынға остом...

**P.S.**

- Мин һеҙҙе шундуҡ таныным, - тине егет моңһоу йылмайып. - Атайға оҡшағанһығыҙ.

Мин дә уның шоморт ҡара күҙҙәренә төбәлдем.

- Һин дә оҡшағанһың.

- Ә ағайым, Марат ниндәй? Ул да...

- Ул һинең копияң. Игеҙәктәр кеүек.

Эргәбеҙгә йыуантыҡ кәүҙәле ҡатын килде. Йөҙө тулы ғына, йыйырсыҡһыҙ. "Тегенең албаҫтыһы" ти күңелдәге шайтан осмото.

- Иҫәнме, Тамсыгөл. - Бер ауыҙы бешкәс, был юлы ул ҡул бирергә ҡыймай, тағы теге хәл ҡабатланырынан ҡурҡа.

Мин үҙем уға ҡуш усымды һонам:

- Иҫәнме, Мөршиҙә ... апай.

- Шулай донъя, - тип һуҙа ул. - Инде бүлешер кеше ҡалманы... Һеҙгә лә шул ҡайғы, беҙгә лә. Уртаҡ ҡайғы...

Элек тә уртаҡ ине шул. Атайыбыҙ ҙа, шатлығыбыҙ ҙа. Тик йөрәк кенә айырым ине. Минеке айырым. Әсәйҙеке айырым. Атайҙыҡы икегә бүленгән. Бары әле килеп, тап ошо минутта ғына, иң ауыры атайыма булғанлығын аңланым. Эйе. Әсәйемә түгел, атайыма ныҡыраҡ ғазаплы булғандыр уртаға теленгән ярты йөрәк менән йәшәүе. Бер яҡтан һөйөү. Икенсе яҡтан бөткөһөҙ ғәйеп тойғоһо. Гонаһ тойғоһо. Выждан ғазабы.

Инде барыһы ла артта. Улар инде теге донъяла бергәлер. Бәхетлелер. Аңлашҡандарҙыр.

- Улар айырылышырға тейеш булмағандыр, моғайын, бер көндә үлергә, эй, ни, теге донъяға китергә яҙғас... Мин айырғанмындыр... Хоҙайым, кисерә күр! - Апай ҡапыл ғына илап ебәрҙе лә, яулығы менән күҙен ҡапланы.

- Бәлки... Бәлки, шулайҙыр. Хәҙер инде... һуң. Бик һуң! Бушҡа ғазапланмағыҙ! - Мин Мөршиҙә апайҙың күҙен һөртәм. Матур ғына икән. Теге саҡта уҡ күрҙем инде "албаҫтының" һылыулығын. Бары намыҫландым ғына. Бөҙөркә генә сәстәренә ҡалай ҡыҙыҡҡайным! Беҙҙә ҡыҙҙар үҙҙәре төрмәсләндерә сәстәрен, химка яһата. Ә быныҡы үҙе төрмәс-төрмәс кенә. Күҙҙәре йәп-йәшел. Көлөп тора. Сыңғырҙатып көлөүе лә дан ине бит. Тик мин уны ишетмәҫкә тырыштым. Хахылдай шунда буштан-буш тип көйҙөм. Атайымды яратҡанға ғына! Атайымды ҡыҙғанғанға, уға биргем килмәгәнгә генә. Бары балалыҡ һөйөүе хаҡына ғына...

Ошо саҡта кисерҙем уларҙы: ирен ятҡа биргән ғорур әсәйемде лә, балаларының әсәһенә хыянат иткән атайымды ла, беҙҙе атай наҙынан мәхрүм иткән Мөршиҙә апайҙы ла. Тәҡдирҙәр, тинем. Еңел булып ҡалды һымаҡ...

**(Аҙағы. Башы 43-45-се һандарҙа).**

✓ **Мин халыҡ бейеүҙәрен яратам. Башҡорттоң бейеүендә уның холҡон асыҡ күрергә була. Ул ҡырыҫ, ләкин шул уҡ ваҡытта асыҡ күңелле. Һуғышсан, тик баҫҡынсы түгел. Шаян һәм йор һүҙле, әммә тотанаҡлы.**



ӘЙҘӘГЕҘ!

# ТУЙҘАРҘЫ...

## йолаһына тап килтереп үткәрәйек!

**Шаран районында "Туй йолаһы" тип аталған йола фестивале үтте. Ул Башҡортостан Башлығы Грантына ойошторолдо һәм республикала иғлан ителгән Ғаилә йылына арналды. Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса төп белгесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Туй йолаһы" йола фестивале проекты авторы Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы БАЙМЫРҘИНА менән ошо сара тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

**Туй йолалары бөгөнгәсә теүәл тиерлек һаҡланып ҡалған йолаларҙың береһелер, моғайын. Был фестивалдең актуаллеге нимәлә?**

- Һәр бер халыҡтың үҙенең менталитеты бар. Уның йолалары ла үҙенә генә хас, ул тик уларҙың үҙҙәренә генә килешә. Әгәр ҙә кешене ағыулайым тиһәң, сит ерҙең ризығын ашат, тиҙәр бит. Йола ла шулай: әгәр ҙә милләтте юҡҡа сығарам тиһәң, ситтәрҙекен ҡуллан. Ошо хаҡта мин ун йыллап уйланып йөрөнөм. Шөкөр, быйыл ошо идеяны тормошҡа ашырырға мөмкинлек тыуҙы.

Ғөмүмән, туй йолаһы 3 өлөштән тора: баланың донъяға тыуыуы - бәпес туйы, никах туйы һәм кешенең баҡыйлыҡҡа күсеүе. Кеше ғүмерендәге ошо мөһим өс ваҡиға үҙенә күп йолаларҙы ала. Хәҙер сабыйҙарға матур башҡорт исемдәре ҡуша башланылар, быныһы ҡыуаныслы хәл. Баланы тәүге тапҡыр оло туғанына күрһәткәндә башлап аяҡ тәпәйҙәрен күрһәтеү йолаһы онотола төшкән. Шулай итһәң, туғандар татыу була, өлкәне ата-әсәһен ҡыҙғанып йонсотмаясаҡ. Яңы тыуған балаға күҙ теймәһен өсөн туғандарының - атаһының, өләсәй-олатайҙарының һ.б. кейеменән ҡырҡып алынған 40 ҡораманан ҡулдаҡ тегелгән. Нисек яман күҙҙән һаҡланырға, ҡот ҡойорға - былар ҙа онотола бара. Кемдән ҡот ҡойҙорорға икән, тип аптырап ҡалалар күптәр ҡайһы саҡта. Халыҡ медицинаһы ла күп төбәктәрҙә һаҡланмаған. Быйылғы фестивалдә ошоноң кеүек йолаларҙы күрһәткәндәр булмаһы, киләсәктә булыр, тип ышанам.

Бик һирәк төбәктәрҙә генә һаҡланып ҡалған йолаларҙың береһе тураһында әйтеп китәйек. Мәрхүмде һуңғы юлға оҙатҡандан һуң, бәлә-ҡазаның, үлемдең юлын яҙлыҡтырып, өйгә һыу буйынан урап ҡайтҡандар. Фольклорҙа йылға ғүмер менән бәйле. Ғүмер - аҡҡан һыу һымаҡ, тиелә йырҙарҙа ла. Йолаларға анализ эшләйһең дә, халҡыбыҙҙың шул тиклем аҡыллы булыуын аңлайһың. Һыу буйынан урап ҡайтҡас, бөтөн хәсрәт һыу менән ағып киткән. Аяҡ кейеменә йәбешкән зыярат тупрағы ла йыуылып ағып китергә тейеш булған. Ҡайтҡас, кейемдәрҙе йыуып, тиҫкәреһен әйләндермәй, тышта өс көн елләткәндәр. Бына был ҡағиҙәләр бөгөн онотолған. Бәлки, был Ислам дине буйынса дөрөҫ тә түгелдер, әммә халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаларын белергә тейешбеҙ. Йолаларҙың бына ошондай тәрбиәүи нескәлектәрен асыҡлау, уларҙы кире көнкүрешебеҙгә ҡайтарыу йәһәтенән фестивалдең әһәмиәте ҙур.

**Хәҙерге көндә күп йолалар заманлаштырыла, бының хәүефе бармы?**

- Күреп йөрөйбөҙ, туйҙарҙа бөтөн йолалар бер нисә сәғәт эсендә үтәлеп тә ҡуя. Тамадалар уларҙы бутап-бутап атҡара, сөнки үҙҙәре лә белмәй. Сит йолалар, мәҫәлән, сәскә ташлау, кейәү-киленде һынау килеп инде. Башҡорт туйы йолаһында бөтөнләй икенсе һынауҙар бар. Улар ҙа бик ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, кейәүгә бирерлек ҡыҙға яҫтыҡ менән һуғып ҡарағандар. Кейәүҙең етеҙлеге ҡыҙ йәшергән ваҡытта һыналған. Ҡыҙ йәшерелгән өйҙөң асҡысын эҙләп, эт тәпәйенә бәйләгәндәр. Ҡурҡамы, юҡмы икәнлеге лә баһаланған. Фестивалдә Дәүләкән районынан "Дим" халыҡ фольклор ансамбле күрһәтте был йоланы. Килендең һыуҙан ҡайтҡанда һыуын сайпылтмай атлауын да юрап ҡуйғандар. Төрлө һынамыштар ҙа барлыҡҡа килгән, әйтәйек, йортҡа килен төшкәндә мал-тыуар ишәйеп торһа, килен түлле булыр, тигәндәр. Яусыларға ризалығын белдереп, ҡыҙ үҙе сиккән һөлгө биргән. Бынан һуң туйға әҙерләнә башларға ла булған.

Бөгөн ҡоҙаларҙың холҡон белмәй ҙә ҡалабыҙ. Ә борон туй ваҡытында холҡтарын ла, аҡыл ағын да "сиртеп" ҡарағандар. Ҡоҙаларҙың холҡон һынап ҡарау өсөн төртмә таҡмаҡтар, үпкәләтә яҙып әйтелгән һүҙҙәр шуларға инә. Бөгөн дә туйҙарҙа ҡапма-ҡаршы таҡмаҡтар әйтешергә була. Элек кейәү, ҡалымын түләп бөтмәйенсә, кәләшен күсереп ала алмаған. Шуға әсә йортонда балалар ҙа тыуған. Ейән, ейәнсәр һүҙен ҡушып яһалған башҡорт исемдәре шунан тороп ҡалған, мәҫәлән, Ейәнсура. Мин ошоға әйләнеп ҡайтайыҡ тимәйем, бөгөнгө көн күҙлегенән был мөмкин дә түгел. Әммә башҡа йолаларҙы тоторға була.

**Һеҙҙең өсөн яңылыҡ булған берәй йола булдымы был фестивалдә?**

- Йолаларҙы күберәк китаптан алып сәхнәләштергәндәр. Үҙҙәренең төбәгенә хас һынамыштарҙы, йыр-бейеүҙәрҙе ҡушып алып килгән дәүләкәндәр айырылып торҙо, улар Гран-при яуланы. Килен һандығын һатыу бөтөн төбәктәрҙә лә бар. Был фестивалдә бишек туйынан сәхнәләштереүҙәр күберәк булыр, тип көткәйнем. Туймазыларға афарин, һирәк башҡарылған йолаларҙың береһе - һырға туйын күрһәттеләр. Ул бик ҙур тема, киләсәктә коллективтар уға иғтибар итер, моғайын. Китаптарҙан ҡарарға ла мөмкин, тик урындағы ерлектәге йолаларҙы ололарҙан һорап эшләһәләр, иң яҡшыһы шул. Ҡалғандар килен төшөрөү, йыртыш йыртыу кеүек йолаларҙы күрһәтте, бер-береһен ҡабатлаған моменттар күп булды.

Фестивалгә бар коллективтарҙы ла саҡыра алманыҡ. Сөнки Шаран ерендә бындай ҙур сара беренсе тапҡыр уҙа. Беренсе тапҡыр булһа ла, туй йолаларын күреү һәм семинарҙа ҡатнашыу өсөн килеүселәр күп булды. Өфөлә әүҙем эшләгән "Ҡапыл туй"ҙың етәкселәре лә килде, өйрәнеп ултырҙылар. Бынан тыш, түңәрәк өҫтәл булды, киске уйында һәр төбәк милли уйындарын өйрәтте. Бер-береһе менән аралашып, йолалар, уйындар отошоп ҡайттылар.

Сараны ике йылға бер ойошторорға килештек Шаран районы менән. Тематика шул тиклем ҙур, төбәктәрҙә йолаларҙың үҙенсәлектәре күп. Шуға ла был өлкәлә эшләйһе эштәр күп әле. Быйыл ҡатнаша алмаған коллективтар киләһе йылдарға дәртләнеп торһондар.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠЫЙЫУҺЫҘ БУЛҺА...

## бейеү түңәрәгенә йөрөтөгөҙ!

**"ТНТ" федераль каналында барған "Бейеүҙәр" ("Танцы") телевизион тапшырыуы быйыл үҙенең 5-се миҙгелен тамамлау алдында. Төрлө йүнәлештә ижад иткән меңәрләгән бейеүселәрҙе бер урынға туплаған был проектта беҙҙең яҡташтар ҙа уңышлы сығыш яһай. Шундай таланттарҙың береһе - Белорет ҡалаһы егете, "Бейеүҙәр" проектының ике миҙгелендә ҡатнашыусы Роберт ӘМИРОВ проект хаҡындағы тәьҫораттары һәм бейеү сәнғәтенә ҡарашы менән бүлешә.**




- Ҡыйыуһыҙ ғына бала булдым. Шуға күрә, ҡалала йәшәһәм дә, бер ниндәй түңәрәккә лә йөрөмәнем. Атай-әсәйем дә үҙ яйыма ҡуйҙы, көсләп бер ҡайҙа ла алып барманы. Ләкин апайым бейеүгә булған ынтылышымды күреп булһа кәрәк, инициативаны үҙ ҡулына алды һәм 10 йәшемдә етәкләп Мәҙәниәт йортоноң бейеүҙәр түңәрәгенә алып барҙы. Уның был аҙымы тормошомдоң тотош йүнәлешен билдәләне. Бөгөнгө көндә бейеү - яратҡан шөғөләм генә түгел, ә бар йөрәгемде һалып башҡарған эшем дә.

"Бейеүҙәр" проектында ике тапҡыр ҡатнаштым. Беренсе миҙгелдең "Иң яҡшы 50 бейеүсе" исемлегенә эләгеүем мине ҡанатландырҙы, үҙемә ышанысты арттырҙы, бейеүҙәр менән артабан ныҡлап шөғөлләнергә этәргес көс бирҙе. Унан һуңғы дүрт йылда үҙ өҫтөмдә ныҡ эшләнем: 30 килограмға ябыҡтым, бейеү стилдәре йүнәлештәрен киңәйттем, профессиональ оҫталығымды арттырыу йәһәтенән ырамлы ғына аҙымдар яһаным. Беренсе тапҡыр проектҡа оҫраҡлы эләкһәм, быйылғы "Бейеүҙәр"гә мин физик яҡтан ғына түгел, ә рухи йәһәттән дә ныҡлы әҙерлек менән барҙым. Шуға ла илдең "Иң яҡшы 36 бейеүсеһе" исемлегенә эләгеүемде ниндәйҙер мөғжизәгә бәйләмәйем, был минең ҡара тиремдә түгеп яулаған баҫҡысым.

Ғәҙәттә, конкурстарҙың сәхнә артында төрлө интрига, аҫтыртын этлеккә, мәкерлеккә лә урын булыуы сер түгел. Ләкин "Бейеүҙәр" проекты был ҡағиҙәне инҡар итә. Унда дошманлыҡҡа урын юҡ. Барыһы ла дуҫтарса мөнәсәбәттә, бер-береһен хуплап, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора. Жюри ағзалары ла тәү ҡарашҡа ҡырыҫ, тупаҫ һәм ҡаты күңелле күренһәләр ҙә, үҙ тәрбиәләнеүселәре өсөн бөтә йөрәктән янып-көйгән остаздар.

Мин халыҡ бейеүҙәрен яратам. Башҡорттоң бейеүендә уның холҡон асыҡ күрергә була. Ул ҡырыҫ, ләкин шул уҡ ваҡытта асыҡ күңелле. Һуғышсан, тик баҫҡынсы түгел. Шаян һәм йор һүҙле, әммә тотанаҡлы. Кәрәк урында ут кеүек ҡыҙыу, тик бер ҡасан да башын юғалтмай. Талғын аҡҡан һыу һымаҡ һил күңелле, ләкин ҡыйырһытылған саҡта йәшен саткыһындай аяуһыҙ. Халҡымдың бөтә матур сифаттарының да бейеүҙәрендә сағылыш табыуы тамашасыны арбай, әсир итә, бейеү ижадының бөйөклөгөн бар яҡлап та күрһәтә. Шуға күрә үҙебеҙҙең бейеү сәнғәтен һаҡлап ҡалыу, уны байытыу һәм үҫтереү беҙҙең бурысыбыҙ.

Бейеүҙе маңлай күҙе менән генә күҙәтеп, уның айышына, бөтөн тәрәнлегенә төшөнөп етеп булмай. Был нескә ижадҡа күңел күҙе аша бағыу мөһим. Был халыҡ бейеүҙәренә лә, башҡа төрлө йүнәлештәге бейеүҙәргә лә берҙәй уҡ ҡағылышлы. Мин, мәҫәлән, урам стиле йүнәлешендәге (уличное направление) - хип-хоп, брейк-данс, поппинг, локинг - бейеүҙәренә өҫтөнлөк бирәм. Уларҙың һәр береһе бейеү йүнәлеше генә түгел, ә айырым бер мәҙәниәт, йәшәү рәүеше, философия. Ошоно аңламайынса тороп, бейеүҙең бөтә асылын күрһәтеп булмай. Күҙәткәнегеҙ барҙыр - бер үк бейеүҙе барыһы ла төрлөсә башҡара. Кемдер тәүге минуттарҙан уҡ тамашасаһынының иғтибарын йәлеп итә - уның бейеүенең "күңеле" бар. Өйрәнгән буйынса хәрәкәттәр эшләп кенә бейеп булмай, сөнки уның ҡоролого күҙгә бәрелеп тора.

Бейеү, ниндәй генә йүнәлештә һәм стилдә булмаһын, һәр кем өсөн файҙалы. Ул яңы мөмкинлектәр биреп кенә ҡалмай, ә кешенең үҙен бөтөнләй икенсе яҡтан аса, уны үҫтерә, рухи йәһәттән байыта, йәшәү дәрте бирә, илһамландыра. Әгәр ҙә йөрәктә бейеүгә ынтылыш бар икән, нисә йәштә булыуға ҡарамаҫтан, тәүәккәллергә кәрәк.

Әйткәндәй, балағыҙ үтә лә ҡыйыуһыҙмы? Ике лә уйламай, бейеү түңәрәгенә яҙҙырығыҙ - баҙнатһыҙлығы ла, оялыусанлығы ла һыпырып алғандай юҡ булыр.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

*✓ Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндәҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ.*



ИНТЕРНЕТТАН



## БҮЛӘК КЕМДЕҢ КӘЙЕФЕН БОҘА?

■ Клиник психолог Рамани Дурвасула әйтеүенсә, ҡәһүәнең ниндәй төрөнә өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, кешенең холҡон билдәләргә була. Классик ҡәһүә яратыусылар үтә дөрөҫ йәшәүсе, талапсан булып ҡыланыусылар рәтенән. Улар киҫкен, түҙемһеҙ була, үҙгәрештәрҙе яратмай. Латтеға өҫтөнлөк биргәндәр ярҙамсыл иҫәпләнә. Ниндәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан ярҙам көтә алаһығыҙ. Әммә был кешеләрҙең юҡҡа көйөп барыу кеүек сифаты ла бар. Артыҡ талапсандар капучино ярата. Улар хис-тойғоға бай, бар нәмәне контролдә тоторға тырыша, үҙҙәренең сәләмәтлеген дә яҡшы һаҡлай. Ирей торған ҡәһүә еңел холоҡ, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырырға яратыусы кеше тураһында һөйләй. Ә һалҡын татлы ҡәһүәне социаль яҡтан ҡыйыуҙар эсә. Улар, ғәҙәттә, күп нәмәне уйламайынса хәл итә.

■ Бүләк биреү - кешелек тарихындағы иң боронғо йолаларҙың береһе. Психологтар билдәләүенсә, был кешенең психик торошона ла яҡшы тәьсир итә. Ябай ғына бүләктән дә ыңғай тойғолар кисергән кешеләр була. Кемдер ҡиммәтле бүләктәр ҡабул итеп өйрәнгән, уларҙың иһә кәрәкле әйберен ала алмаһа, кәйефе төшә. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙең кәйефе йыш үҙгәреп тора. Бүләк биреүсе лә, кешенең ҡыуаныуын күреп, шатлана.

■ Көн тәртибе лә кәйефебеҙгә йоғонто яһай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндәҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Шәкәр билде ҡалынайта, ҡан әйләнешенә зарар килтереүе ихтимал. Һәҙәмтәлә, эске ағзалар эшмәкәрлеге зыян күрә. Ғалимдар 2 аҙна дауамында көнөнә 225 грамм шәкәр ашаған ир-егеттәрҙе күҙәткән. Эксперимент башланған һәм тамамланған мәлдә ир-егеттәрҙең аяҡ ҡан әйләнеше күрһәткесен баһалаған. Баҡтиһәң, шәкәрҙе күп ашаусыларҙа ҡан әйләнеше 17 процентка насарая икән. Бынан тәү сиратта йөрәк һәм мейе зыян күрә. Ғалимдар билдәләүенсә, кеше дөрөҫ туҡлана икән, ҡайһы берҙә татлы эсемлектәр эсеү һәм тәмтом ашау уның сәләмәтлеген ҡаҡшата алмай. Әйткәндәй, шәкәр яман шеш күҙәнәктәрен уята һәм шештәрҙе агрессивҡа әйләндерә. Яман шеш күҙәнәктәре шәкәрҙе тарҡата һәм лактата матдәһен барлыҡҡа килтерә, был шеште үҫтерә. Сәләмәт күҙәнәктәргә ҡарағанда, зарарланған күҙәнәктәр шәкәрҙе күберәк тарҡата. Фән был метаболик аномалияны Варбург тәьсире тип атай. Яман шеш күҙәнәктәренең шәкәрҙе күпләп "ашауы" шеште аҙҙыра һәм даими туҡландыра. Быны раҫлау өсөн белгестәр бәшмәктәрҙә һынауҙар үткәрә. Бәшмәк күҙәнәктәрендә яман шештәге кеүек үк аҡһымдар бар, бары тик улар мутация һәҙәмтәһендә формаһын үҙгәрткән. Етмәһә, бәшмәктәр ҙә шәкәр ярата.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Ғәҙәттә, сирләй башлаһаҡ, табипҡа барыуҙан алда ҡул аҫтында булған дарыуҙарҙы барларға һәм үҙаллы дауаланырға тотонабыҙ. Таныш күренешме? Күптәр өсөн таныш ҡына түгел, ғәҙәти хәлдәр. Әммә сирҙәр төрлө сығанаҡлы булыуы һәм уларҙы дарыу йәки укол ғына бөтөрмәүе лә мөмкин. Әлбиттә, күпмелер ваҡытҡа ауыртыуҙы баҫып торасаҡ, әммә ваҡыт үтеү менән сир ҡабат үҙен белдертәсәк. Юҡҡа ғына ололар ғына түгел, табиптар ҙа бигерәк тә үҫмер ваҡытта умыртҡа һөйәгенә иғтибарлы булырға ҡуша тиһегеҙме? Баҡтиһәң, умыртҡа һөйәгендә барлыҡҡа килгән ауыртыу организмдың төрлө урынындағы ағзалар менән туранан-тура бәйләнештә икән.**

# БАШЫҢ АУЫРТҺА...

## умыртҡаңды дауала

**Беренсе муйын умыртҡаһы (С1, атлант):** баш ауыртыуы, мигрень, хәтер насарайыуы, баш әйләнеү, артериаль гипертензия, мейеләгә ҡан әйләнешенең етешһеҙлеге.

**Икенсе муйын умыртҡаһы (С2):** танау эргәһендәге ҡыуышлыҡтарҙың ялҡынһыныуы һәм тоноуы, күҙ тирәһенең ауыртыуы, ишетеү насарланыуы, ҡолаҡ ауыртыуы.

**Өсөнсө муйын умыртҡаһы (С3):** бит невралгиялары, ҡолаҡ шаулауы, бит тирәһендәге һыҡҡылар, теш һыҙлауы, кариес, теш ҡаҙналарының ҡанауы.

**Дүртенсе муйын умыртҡаһы (С4):** хроник ринит, ишетеү насарайыу, ирен тирәһенең ярылыуы, ауыҙ тирәһендәге мускулдарҙың ҡорошҡағы.

**Бишенсе муйын умыртҡаһы (С5):** тауыш ҡарлығыу, тамаҡ ауыртыу, хроник фарингит.

**Алтынсы муйын умыртҡаһы (С6):** хроник тонзиллит, соңҡа тирәһендәге мускулдарҙың көсөргәнеше һәм ауыртыуы, ҡулдарҙың өҫкө өлөшө ауыртыуы, ҡалҡан биҙенең ҙурайыуы.

**Етенсе муйын умыртҡаһы (С7):** ҡалҡан биҙе сире, һалҡын алдырыу, ҡулбаш быуынының ауыртыуы, депрессиялар, ҡурҡыу.

**Беренсе күкрәк умыртҡаһы (D1):** соңҡа мускулының көсөргәнеше, ҡулбаш, беләк һәм ҡул суғының ауыртыуы, ҡул бармаҡтарының ойоу тойғоһо.

**Икенсе күкрәк умыртҡаһы (D2):** кардиалгия, йөрәк ритмының боҙолоуы, ҡурҡыу.

**Өсөнсө күкрәк умыртҡаһы (D3):** күкрәк ситлегендәге ауырыуҙар, йүтәл, бронхит, астма, плевро-пневмония, тын алыуҙың төрлөсә боҙолоуы.

**Дүртенсе күкрәк умыртҡаһы (D4):** үт сығарыу юлдары дискинезияһы, үт ҡыуығындағы таштар, һары ауырыуы, баштың уң яҡ ҡабырғаһы һәм уң яҡ ҡулбаш ауыртыуы.

**Бишенсе күкрәк умыртҡаһы (D5):** бауыр ауыртыуы, артериаль гипотония, аҙ ҡанлылыҡ, хроник арығанлыҡ, ҡан әйләнеше етешһеҙлеге, артриттар.

**Алтынсы күкрәк умыртҡаһы (D6):** үҙәк көйөү, ашҡаҙан-эсәк трактының төрлө патологиялары, шәкәр сире.

**Етенсе күкрәк умыртҡаһы (D7):** күңел болғаныу, үҙәк көйөү, осҡолоҡ, "тормош энергияһының" етешһеҙлеге, хәлһеҙлек тойғоһо, бөйән эсәге, ашҡаҙан ауырыуҙары.

**Һигеҙенсе күкрәк умыртҡаһы (D8):** талаҡ функцияһының боҙолоуы, организмдың һаҡланыу көстәренең кәсһеҙләнеүе, иммунодефицит.

**Туғыҙынсы күкрәк умыртҡаһы (D9):** аллергия, кесерткән биҙгәге.

**Унынсы күкрәк умыртҡаһы (D10):** төрлө бөйөр ауырыуҙары, тоҙ алмашыныуының боҙолоуы, артериаларҙың кальцинозы, хроник арыу.

**Ун беренсе күкрәк умыртҡаһы (D11):** тире ауырыуҙары: һыҡҡылар, экзема, фурункулдар, тиренең ҡытыршыланыуы, псориаз һ.б.

**Ун беренсе күкрәк умыртҡаһы (D12):** метеоризм, ревматизм, үҫеш боҙолоу, түлһеҙлек.

**Беренсе бил умыртҡаһы (L1):** эс ҡатыу, эс китеү һ.б., эсәктәрҙең һүлпәнләге, йыуан эсәктең төрлө патологияһы.

**Икенсе бил умыртҡаһы (L2):** эстең киҫкен быуылмаһы, һуҡыр эсәк менән проблемалар, веналарҙың варикоз киңәйеүе.

**Өсөнсө бил умыртҡаһы (L3):** күрем циклының боҙолоуы, йөклөлөк патологияһы, күсеү осоро патологияһы, бәүел ҡыуығы ауырыуы, тубыҡтар ауыртыуы (бик йыш бәүел ҡыуығы менән бергә), импотенция, төнөн бәүел тотмау.

**Дүртенсе бил умыртҡаһы (L4):** ишиас, билдең сәнсеп ауыртыуы, простата биҙенең патологияһы, ауыртыуы йәки йыш кесе хәжәт үтәү.

**Бишенсе бил умыртҡаһы (L5):** сираҡ һәм аяҡ табанында ҡан әйләнеше боҙолоуы, һыуыҡ аяҡтар, балтыр ҡорошҡағы, аяҡтарҙың һәм аяҡ табандарының шешенеүе,

**Һигеҙгүҙ:** ишиас, бәләкәй таз өлкәһендә проблемалар, хроник эс ҡатыуы, аяҡтарҙа һәм аяҡ табандарында ауыртыуҙар.



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҠАРТТАРҘЫҢ УРЫНЫ...

## пансионаттамы?

**Кемдең генә ете һаны теүәл, һаусәләмәт булып, үҙ аҡылында йөҙгә тиклем йәшәгеһе килмәһен! Сәләмәт ҡартайыу, әүҙем тормош ысулдары, туҡланыу, физик әүҙемлекте һаҡлау тураһында бик күп китаптар нәшер ителә бөгөн, интернетҡа материалдар ҡуйыла - уҡып ҡына өлгөр!**

Ләкин мин әллә ниндәй билдәһеҙ авторҙарҙың китабын һатып алып, аҡса әрәм итмәйем: ул аҡсаға мин "Киске Өфө"гә яҙыла ла ҡуям, шунан ярты йыл буйы рәхәтләнеп уҡыйым. Шул уҡ сәләмәтлек, шифалы үләндәр, әүҙем тормош рәүеше хаҡында уның биттәрендә лә мәҡәләләр бирелеп бара. Мәҫәлән, былтыр гәзиттең 13-сө битендә урын алып торған "Сәләмәт бул!" рубрикаһында Роберт Энтони, унан һуң Эндрю Мэтьюз тигән сит ил авторҙарының сәләмәт тормош хаҡында популяр хеҙмәттәре баҫылды. Ҡыҙыҡлы ғына күҙәтеүҙәре, кәңәштәре менән иҫтә ҡалды улар. Сит ил авторҙары, тигәнгә баҫым яһауымдың сәбәбе шул: ундағы йәшәү рәүеше, шуның әҙәмтәһе булараҡ, уларҙың менталитеты, фекер йөрөтөүҙәре беҙҙекенән барыбер бер ни тиклем айырыла. Шуға күрә үҙебеҙҙең табиптар, психологтар, геронтологтар, ғалимдарҙың да киң аудиторияға тәғәйен ҡыҙыҡлы мәҡәләләрен баҫтырыу отошлораҡ, күңелгә яҡыныраҡ булыр ине, тиммәксемен.

Әмәлгә ҡалғандай, быйыл Светлана Кузина тигән бер автор пәйҙә булды. Уның "Илле йәштән һуң..." тигән сәхифәне матур ғына уҡылып килде тәүҙә, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, ниндәйҙер кәңәштәр бирелә. Ләкин яраҡтан гәзитебеҙҙең 44-се һанында мин был ханымды...таныманым! Хәтерҙе күнектереү тураһында номерҙан номерға һөйләп килде лә, 44-се һанда Альцгеймер сиренә (хәтер юйылыуы, аҡыл еңеләйеүе һәм тора-бара сирленең кеше әрҙәмынан башҡа йәшәй алмай башлауы) туҡталды. Яман сир, Хоҙай күрһәтмәһен, бөгөн уның менән сирләүселәр һаны арткандан-арта бара икән. Үҙегеҙ белмәгән ни эш - стресс заманында йәшәйбеҙ. Ләкин быныһы - башҡа тема, шулай уҡ әлеге сир хаҡында ла ентекләп һөйләргә йыйынмайым, ҡыҙыҡһынған кеше был турала мәғлүмәт таба алыр. Тик шуны ғына әйтәм: 50 йәштән һуң һәр кем табиптарҙа тикшерелеп, шул иҫәптән, баш мейеһе торошона ла махсус тест үтеп, һаулығын ҡайғыртып йәшәргә тейеш, юғиһә, С.Кузина әйтмешләй, "маразм һиҙҙермәй генә килә", аҙаҡ һуң булыуы бар. Унан ятырға тура килмәгәйе балаларығыҙға, яҡындарығыҙға тере бәйнәт булып - иң ҡыйыны шул булыр.

Ярай ҙа, балаларың булып, өҙөлөп торһалар. Тик хәҙерге быуындың сабырлыҡ, кешелек сифаттарына һәр ваҡытта ла таянырлыҡмы икән һуң? Баяғы автор С. Кузина ла шул хаҡта һөйләй, тик ул, ысынлап та, үҙенең баштағы стиленә тап килмәгән нәмәләр һөйләй. Әлеге лә баяғы, сит ил йәшәү рәүешен миҫалға килтерә. Унда бит балалары сирлеләрен генә түгел, ә ҡартайған ата-әсәләрен дә дәүләт ҡарамағындағы махсус пансионаттарға тапшыралар. "Әммә беҙҙә улай ҡабул ителмәгән, һәм бер һүнеп барған яҙмышҡа тотош ғаилә ғүмерен бағышлай, ғүмер йылдарын, көсөн, сәләмәтлеген әрәм итә, - тип яҙа С.Кузина.- Ә еңеләйгән кешенең хәле яҡшырмай, насарая ғына бара. Ундай оло кеше менән йәшәүселәрҙең нервыһы ҡаҡшай һәм үҙҙәре лә сиргә һабыша". Шуға күрә автор сирлене ҡарап яфаланмаҫҡа, сит илдәге кеүек, уларҙы махсус пансионаттарға тапшырырға кәңәш бирә. Тик бер нәмә хаҡында онотоп ебәргән Кузина ханым: беҙҙең менталитет хаҡында. Һәм, бәлки, уның хаҡында ғына ла түгел, тағы ла юғарыраҡ, ҙурыраҡ төшөнсәләр: рух, аҡыл, йөрәк, выждан, намыҫ, туғанлыҡ хистәре, күңел байлығы тураһында. Ә бына уларҙы ҡайҙа итергә беҙгә? Кеҫәгә тығып йә шкафҡа йәшереп булмай бит уларҙы. Сит илдә, ихтимал, был төшөнсәләр (ғәфү итә күрһендәр), беҙҙәге кеүек үк күңел төпкөләндә ятмайҙыр йә беҙҙәге кеүек үк көсҡә эйә түгелдер улар - кем белә улар менән йәшәп ҡарамағас... Көслө хис булһа, сирле ата-әсәләрен приютҡа алып барып ташламаҫтар ине бит. Унда, ярай ҙа, яҡшы ҡарайҙарҙыр, ләкин беҙҙә медицина хеҙмәтләндереүенең, кешегә, етмәһә, аҡылын юйған ҡарттарға ҡарата мөнәсәбәттең нисек булырын үҙегеҙ ҙә яҡшы күҙаллайһығыҙҙыр: әллә ниҙә бер поликлиникаға барғанда ла күрмәгәнеңде күрһәтеп ҡайтаралар бит, юғиһә. Бәлки, был мәсьәлә буйынса башҡасараҡ фекерҙәге кешеләр ҙә барҙыр, ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?

**Фәрхәнә ИСМӘҒИЛЕВА,**
**хеҙмәт ветераны.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Стресс ваҡытында ҡул бармаҡтарына массаж

Ауыр көндәр ваҡытында (яңы ай, тулы ай, айҙың дүртенсе фазаһы) бармаҡтарығыҙҙы шартлатығыҙ, 2-3 минут дауамында уң ҡулығыҙҙың баш бармағы тырнағы менән һул ҡулығыҙҙың сәтәкәй бармағын устан тырнаҡтарға табан; һул ҡулығыҙҙың баш бармағы тырнағы менән уң ҡулығыҙҙың сәтәкәй бармағын устан тырнаҡҡа табан һәм киреһенсә массажлағыҙ: сәтәкәй бармаҡтарҙа йөрәк меридиандары тамамлана.

### Имбер төнәтмәһе - стресҡа ҡаршы сара

Был эсемлек һәр саҡ файҙалы, ә стресс ваҡытында бөтөнләй алмаштырғыһыҙ сара булып тора. Бер стакан ҡайнар һыуға бысаҡ осонда ғына имбер онон, лимон киҫәген, бер балғалаҡ бал һалып болғағыҙ. Был ҡатнашма гәзәттәге кофе йәки ҡаты сәйҙе алмаштыра, шул уҡ ваҡытта иммунитетты нығыта.Имбер онон барлыҡ ризыҡтарға ла ҡушырға мөмкин. Бынан тыш, шафран, ҡара һәм ҡыҙыл борос, мускат сәтләүеге, карри, кардамон, кориандр кеүек тәмләткестәр ҙә яҡшы йоғонтоға эйә. Уларҙы салаттарға, икенсе блюдоларға ҡушырға мөмкин. Көнсығыштың экзотик әҫтәмәләренән тыш, беҙҙең һыҙатта һуған, һарымһаҡ, урман йыуаһы, тоҙло ҡыяр яҡшы, әммә уларҙы әсе аш менән ашарға кәрәк. Арыһағыҙ йәки стресс ҡаҡшатһа, организмығыҙға психик көсөргәнештән арынырға ярҙам итегеҙ. Юҡһа, гастрит йәки икенсе берәй сир барлыҡҡа килеүе мөмкин. Бының өсөн устарығыҙҙы асып, өҫкә ҡаратып ҡуйығыҙ һәм кире энергияның устарығыҙҙан - өҫкә, табанығыҙҙан аҫҡа киткәнен күҙ алдына килтереп, тын алығыҙ. Шулай уҡ үҙегеҙҙе сайыр еҫе менән тулған ҡарағай урманында торамын тип уйлағыҙ.

### Стресҡа ҡыҙыл төҫ ярҙам итә

Көн һайын устарығыҙҙы һәм табандарығыҙҙы ҡыҙыл утҡа тотоу ҙа стресты ҡыуырға ярҙам итер. Иң мөһиме - ут рефлексоген зоналарға төшһөн. Улар тап устарҙа һәм табандарҙа күп тә инде. 10-20 көн дауамында һәр зонаға көн һайын 10-15 секунд йоғонто яһау асығыу ваҡытында барлыҡҡа килгән стресты ла, башҡа стресты ла компенсациялай. Әлбиттә, өй шарттарында быны һәр кем эшләй алмай, сөнки был - лазер уты. Хатта физприборҙар магазинынан ҡыҙыл лапмаға ҡуйыу мөмкин булған полярлаштырыу пленкаһын алырға ла һәр кемдең хәленән килмәй. Шуға күрә стресты кәметеү технологияһын мөмкин тиклем ябайлаштырырға кәрәк. Күптән түгел генә фотоларҙы ҡараңғы бүлмәлә ҡыҙыл фонарь яҡтыһында эшләйҙәр ине. Тап ана шул фонарь, хатта ябай ҡыҙыл лампа ла стресҡа ҡаршы ҡулланылғанда яҡшы һөҙөмтә бирә.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ИСЕМЕҢ ШӘП БУЛҺЫН!

**Йыл дауамында республиканың ауыл-ҡалаларында Ғаилә йылына арналған бихисап саралар уҙып тора. Хәйбулла районы китапханалары араһында ла "Ғаилә - тормоштоң тылсымлы символы" тип аталған район конкурсы иғлан ителгәйне. Уның төп маҡсаты, әлбиттә, ғаиләләрҙә китап уҡыу йолаһын тергеҙеү, әүҙемләштереү.**



Ошо көндәрҙә Юлбарыҫ ауылы китапханаһы "Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын, ырыуыңа тап булмаһа, ораныңа тап булһын!" тип аталған бик фәһемле сара үткәрҙе. Ата-әсәнең бала алдында үтә яуаплы, мотлаҡ үтәлергә тейешле өс төп бурысы бар. Беренсеһе - сабыйға матур, мәғәнәле исем ҡушыу; икенсеһе - баланың кем менән дуҫ булыуына диҡҡәт итеү; өсөнсөһө - лайыҡлы ғүмер юлдашы һайларға ярҙам итеү. Кисәлә билдәләнеүенсә, яңы тыуған сабыйға исем һайлау проблемаһы әле лә актуаль булып ҡала. Күп ата-әсәләр балаға исемде алдан уйлап, туғандары менән кәңәшләшеп ҡуша. Исем һайлағанда уның яҡшы мәғәнәле булыуы, башҡортса-русса әйтелеше һәм яҙылышы иҫәпкә алына. Шулай уҡ исемдәрҙең тәрбиәүи мәғәнәһен дә иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Бала бөләкәйҙән үҙ исеменең мәғәнәһен белеп, исемен яратып үҫһә, ул балала үҙенең милләтенә ҡарата ғорурлыҡ уяна.

- Бала исемһеҙ бер көн, хатта бер сәғәт тә ҡалырға тейеш түгел, юғиһә, уны ен-пәрейҙәр алыштыра ла, үҙҙәренең исемен ҡушып өлгөрә, һөҙөмтәлә бала зәғиф йә ауырыу була йә үлә, тип уйлағандар элек. Шуға ла халҡыбыҙҙа "йүргәк исеме" ҡушыу йолаһы булған. Кендек инәһе баланы ҡабул итеп алғас, баланың бер ҡулына ебәк еп бәйләп, ҡолағына шыбырлап, исемен шулай булһын, тип бер исем әйтеп, йүргәккә төргән. "Йүргәк исеме" йәки "тәүге исем" баланы яман көстәрҙән һаҡлай, тигән ышаныу йәшәгән. Ысын исемде иһә сабыйға мулла ҡуша. Аҙан ҡысҡырып, баланың ҡолағына өндәшә, - тип һөйләне ағинәй Рәйлә Байғужина. Артабан ауылыбыҙ аҡһаҡалы Булат Таймасов балаға исем ҡушыу тәртибе тураһында һөйләне.

Китапханасы Гөлсинә Мәғәфүрова кеше исемдәре тураһындағы ғилми хеҙмәттәрҙе, тәрлә һүҙлектәрҙе барланы. Билдәләнеүенсә, башҡорт исемдәре хаҡында һөйләгәндә Таңһылыу Күсимованың исемен телгә алмау мөмкин түгел. Исемдәребеҙҙе туплап, өйрәнеп, халыҡҡа еткергән ғалимәнең тәүге китабы 1976 йылда донъя күрә. Артабан да тулыландырылып, төҙәтелеп, бер нисә тапҡыр баҫтырылған китап милләтебеҙҙең исемдәре буйынса төп әсбап булып һанала. Таңһылыу Кусимованың "Исемдәр доньяһында" тигән китабында һәр бер кеше үҙ исеменең тәржемәһен таба ала.

Хәйбулла районының ЗАГС булеге начальнигы Заһира Биккинина биргән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 2018 йылдың 9 айында (2018 йылдың 30 сентябренә) беҙҙең районда 255 бала тыуған, шуларҙың 139-ы малай, 116-һы ҡыҙ бала. "Бөгөн матур яңғырашлы, саф башҡорт исемдәрен һайлаусы милләттәштәребеҙ байтаҡ, Аллаға шөкөр, - тине Заһира Ғилман ҡыҙы. - Ата-әсәләр балаға лайыҡлы, милли рухлы, мәғәнәле исем һайлай, ә бындай исемдәр кешегә ниндәйҙер кимәлдә дәрәжә өҫтәй кеүек. Бигерәк тә күп ҡушылған, популяр исемдәргә малайҙар араһында - Искәндәр (49 кеше), Бәхтийәр (37), Динислам (35), Ислам (30), Вадим (17), ҡыҙҙар араһында - Алина (40), Самира (40), Әминә (34) тигәндәрен индерергә була. Һирәк һәм гәҙәти булмаған исемдәр ҙә осрай: Янбулат, Әмирхан, Эмиль, Эльнар, Эльза, Элина, Ульяна, Сулпан..."

Шулай итеп, исемдәр хаҡында йомғаҡлап шуны әйтке килә: ата-әсә үҙ балаһына исем ҡушҡанда ашыҡмаһын ине. Ҡушылған исем киләсәктә оялтырлыҡ булмаһын, сөнки исем - кешегә ғүмерендә иң күп ишетергә тура килгән һүҙ ул. Исем мәғәнәһе менән дә, яңғырашы менән дә кешене матурлаһын!

**Гөлсинә МӘҒӘФҮРОВА.**
**Хәйбулла районы.**

✓ *Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.*

*(Франсуа Мориак).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Архив. Халиҡов. Ҡушаев. Тәбейә. Марат. Әрем. Вәғәҙә. Үксә. Айытбаев. Таяу. Айыу. Нужа. Лукойл. Вавра. Билал. Лама. Твен. Ағас. Азат. Атай.

**Вертикаль буйынса:** Манатов. Ҡарамышев. Трибунал. Хужа. Азамат. Ебәк. Рылеев. Абаға. Ғата. Әрмәк. Лупа. Виола. Сана. Төхвәтуллин. Текст. Елкә. Әхмәҙуллин.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (11) дүшәмбе | 7:26 | 8:56 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 20 (12) шишәмбе | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 21 (13) шаршамбы | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 22 (14) кесе йома | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 23 (15) йома | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (16) шәмбе | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 25 (17) йәкшәмбе | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 ноябрь "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**18 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), мелодрама 16+

**20 ноябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**21 ноябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), комедия 12+

**22 ноябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 ноябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**17 ноябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро) - 12.00, 14.00, **"О чем поет осень?"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский) - 16.00 0+

**18 ноябрь "Буратино"** (А. Толстой) 12.00, 14.00, **"О чем поет осень?"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский) - 16.00 0+

СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ...

## ШАҒИРҒА ҺӘЙКӘЛ

**Өфөлә күренекле башҡорт шағиры һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичка һәйкәл ҡуйыласаҡ. Мәҙәниәт министрлығы иң яҡшы бюст проектын эшләүгә конкурс иғлан итте.**

Һәйкәлде Киров урамында, "Башҡортостан" дәүләт концерт залы эргәһендәге биләмәлә ҡуйлар. Конкурста ҡатнашыуға ғаризаларҙы, проекттарҙы, аңлатма яҙмаларын, график материалдарҙы һәм смета-финанс иҫәптәрен авторҙар 2019 йылдың 28 ғинуарынан ҡалмай Октябрь проспекты, 148 адресы буйынса Башҡортостан Республикаһының Рәссамдар союзына тапшырырға тейеш. Тел. 8 (347) 284-42-47.

## ӨЛГӨ БИРҘЕ ҒАИЛӘ

**"Йәш ғаилә - 2018" ҡала конкурсы еңеүселәрен билдәләне. Калинин районынан Ғариповтар ғаиләһе ҡаланы республика бәйгеһендә күрһәтәсәк.**

Икенсе йыл был бәйге ғаилә квесты формаһында үтә. Быйыл Дим районынан Фазылйәновтар, Калинин районынан Ғариповтар, Киров районынан Вәлиәхмәтовтар, Ленин районынан Крючковтар, Орджоникидзе районынан Фәйзулиндар, Совет районынан Сухаревтар һынау тотто. Улар ғаилә гербын яһаны, "Яңы быуат таланттары" тигән станцияләр балаларҙың ижади һәләттәрен күрһәтте, "Ғаилә дефилеһы"нда кейем моделдәре тәҡдим ителде. Һөҙөмтәлә, Ғариповтар еңеп сыҡты. "Ғаилә - ул кешелек һәм мәҙәниәт ҡиммәттәре һаҡсылы, йәмғиәт үҫешен күрһәтеүсе. Йөмлә йорт, етеш тормош, татыу ғаилә - һәр кеше үҙен бәхетле тойһон өсөн ошолар мотлаҡ кәрәк", - тине үҙенең сығышында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов.

## БҮЛӘККӘ - МИЛЛИОН ТӘҢКӘ

**30 октябрҙән 6 ноябргә тиклем Ҡаҙағстан Республикаһының Талдыкурган ҡалаһында V Халыҡ-ара Ҡаҙағстан һәм Үҙәк Азия илдәренең театр фестивале уҙҙы.**

Фестиваль Астана ҡалаһының 20 йыллығына һәм ҡаҙаҡ халҡының билдәле сәнғәт эшмәкәре Тимербәк Жургеновтың 120 йыллығына арналды. Театр форумында Үҙәк Азия илдәре, Рәсәй һәм Европаның театр коллективтары ҡатнашты. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының Башҡорт театры 2 ноябрҙә Туфан Миңнуллиндың пьесаһы буйынса Азат Нәҙерғолов ҡуйған "Эҙләнем, бәгерем, һине..." спектакле менән сығыш яһаны һәм икенсе урын яулап, "Иң яҡшы актерҙар ансамбле" номинацияһында дипломға лайыҡ булды һәм миллион тәңкәлек сертификат менән бүләкләнде.

## АРТИСТ ПРИЗЫНА



**Әбйәлил районында Әхтәм Абушахманов призына Театр коллективтары республика фестивале булды. Унда Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бүздәк, Бөрйән, Ғафури райондарынан театр коллективтары ҡатнашты.**

Һәр сығыштан һуң спектаклдәрҙе тикшереү, шулай уҡ режиссерҙар һәм театр коллективтары етәкселәре өсөн семинарҙар үткәрелде. Гран-при "Ғафури" халыҡ театрына (етәксеһе З. Зәйнишева), 1-се урын бүздәктәргә (етәксеһе Р. Ризуанов), 2-се урын "Ялҡын" театр коллективына (Баймаҡ районы, етәксеһе М. Һунаршина), 3-сө урын "Сағыл" театр коллективы (Әбйәлил районы, етәксеһе М. Моталова) менән "Елмерҙәк" башҡорт халыҡ театрына (Белорет районы, етәксеһе С. Мырҙағәлина) тапшырылды.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "КӘМҺЕТЕЛГӘНДӘР" СӘХНӘГӘ СЫҒА

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры йыл аҙағына тиклем тамашасы иғтибарына тағы ла дүрт премьера тәҡдим итәсәк. Ошо көндәрҙә театр директоры Азат Йыһаншин, художество етәксеһе Мәсәлим Күлбаев, башҡорт труппаһының баш режиссеры Рөстәм Хәкимов, шулай уҡ театр актерҙары журналистар менән осрашты.**

Һуңғы осор республика мәҙәни тормошо мөһим даталарға бай. Милли йәштәр театры Зәйнәб Биишева романы буйынса ҡуйылған "Кәмһетелгәндәр" спектаклен халыҡ яҙыусыһының 110 йыллыҡ юбилейына бағышлай. Спектаклдең премьераһы ноябрҙең 27-28 тәғәйенләнгән. "Кәмһетелгәндәр" романы буйынса сценарийҙы билдәле драматург Владимир Жеребцов яҙған. Режиссер Мәсәлим Күлбаев билдәләүенсә, былай киң күләмле әҫәби әҫәрҙе театрҙың мөмкинлектәренә һыйҙырып бөтөүе ауыр, әлбиттә. "Шулай булһа ла ике сәғәт ярым эсендә беҙҙең театр өсөн төп темаларҙың береһе булған балалыҡ тураһында һөйләшәсәкбеҙ: бәләкәй кешенең өлкәнәйеүе, унда кешелек, әхлаҡлылыҡ сифаттары нисек тәрбиәләнеүе, уның үҙенең кешелек дәрәжәһе тураһындағы тәүге уйланыуҙары - былар барыһы ла һәр кеше өсөн бик мөһим. Ғөмүмән, һуңынан кешенең ниндәй булыуы уның бала сағы менән тығыҙ бәйле, бар нәмәгә нигеҙ бала саҡта һалына. Граждандар революцияһында еңеүселәр булмай, граждандар һуғышында ҡорбандар ғына була. Тарихтың ошо үҙенсәлеген дә мөмкин тиклем сағылдырырға тырыштыҡ. Сөнки бер туғандарҙың бер-береһенә ҡорал күтәреүе - ул үҙе трагедия. Бына ошондай айырыуса ҡатмарлы шарттарҙа үткән бала саҡ тураһында ул. Иң шәп идеяны ла баланың күҙ йәштәре менән үлсәп ҡарағыҙ, шунда уның ҡиммәтен аңларһығыҙ, тигән бит әле Достоевский. Донъя революцияһы яңғыны өсөн балаларҙы етем ҡалдырыу уны аҡлаймы һуң?"

14-15 декабрҙә башҡорт труппаһы Зәйнәб Биишеваның "Мөхәббәт һәм нәфрәт" әҫәре буйынса музыкаль легенда тәҡдим итәсәк. Зөлхизә менән Аҙнағолдоң һөйөү тарихы нигеҙендә кешенең иң көслө тойғолары - мөхәббәт, тоғролоҡ, хыянат, өмөтһеҙлек, нәфрәт тураһында һөйләнәсәк. Спектаклдең режиссеры Рөстәм Хәкимов әйтеүенсә, бик ҡыҙыҡлы алымдар ҙа уйлап табылған, актерҙар бөгөн дә эҙләнеүҙәр өҫтөндә.

Яңы йыл байрамдары мәлендә балалар "Ҡыш бабай һандығы" (Д. Голубецкий, режиссеры - А. Йыһаншин) һәм "Алые паруса" (А. Грин, режиссеры - М. Күлбаев) спектаклдәрен ҡарай алаһаҡ. Уларҙың премьераһы 20 һәм 22 декабргә тәғәйенләнгән.

2019 йылдың майында көтөләсәк премьера - М. Буранголовтың "Башҡорт туйы" ла ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Театр репертуарында барлыҡҡа киләсәк был әҫәр республиканың 100 йыллығына һәм Буранголовтың тыуыуына 130 йыл тулыуға бағышлана. "Башҡорт театрҙарында башҡорт һәм татар классиктарының пьесалары булырға тейеш. Тамашасы уларҙың ҡайһыһына ғына билет һатып алһа ла, яңылышмаясаҡ. Сөнки милли театрҙарҙың тамашасыһы романтик спектаклдәргә теләп йөрөй", - ти уның режиссеры Азат Йыһаншин. Фольклорға, йолаларға, йырға-бейеүгә бай спектакль репертуарҙың бер биҙәгенә әүерелер, тип көтәбеҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ТЕЛЕБЕҘ ЫҢЙЫЛАРЫ

**Халҡыбыҙҙа шундай һутлы һәм тере ҡуҙҙай баҙрап тороусы, ыңйы кеүек асыл һүҙҙәр күп. Улар төрлө һүҙлектәргә инеп, халҡыбыҙҙың алтын фондын тәшкил итә. Үкенескә ҡаршы, һуңғы быуын яҙыусыларының әҫәрҙәренә лә ул һүҙҙәр һирәк инә, улар, асылда, төпкөл ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе инәйҙәребеҙҙең, олатайҙарыбыҙҙың тел осонда тере көйө йәшәй. Ул ыңйыларҙы беҙ гәзитебеҙҙә "Әсәйем ләғәте" рубрикаһында бирә барабыҙ, әлбиттә. Хәтергә төшөрөүҙе дауам итәйек.**

## АТА-БАБАҢ ҠАЛДЫРҒАН ҺҮҘ

**Байтал** - дүрт йәшлек бейә; тай байтал - ике йәшлек бейә; ҡонан байтал - өс йәшлек бейә.

**Баҡ** - бәхет.

**Баҡма** - имгәк, сирләшкә.

**Баҡрас** - ижау.

**Баҡта** - ҡаулан; һарыҡтың яҙғы йөнө.

**Баҡтырыу** - тураһын әйтеү; антыратыу; дауалатыу.

**Баҡшылланыу** - күрәҙәлек ҡылыу.

**Баҡырсаҡ** - һыбыҙғы.

**Баҡыртыу** - тиргәү.

**Баҡыт** - һыуҙа оҙаҡ ятҡан ағас.

**Балапан** - йыуантыҡ, тос; сабый; бөркөттөң ирәбе себеше.

**Балға** - сүкеш; бәләкәй балта.

**Балдыҙ** - ҡәйнеш; ҡатындың һеңлеһе.

**Балинәһе булыу** - әсә булыу.

**Балтаҡан** - бер һүҙҙе өҙмәй ҙә ҡуймай һөйләүсе.

**Бап** - ҡиәфәт; оҫталыҡ; тәм; тәрбиә.

**Бапаҡ** - ҡотһоҙ, яман.

**(Дауамы. Башы 43-45-се һандарҙа).**

АФАРИН!




# ШӘП ЙЫРСЫ БАҺАҺЫ...

**Туймазы ҡалаһы тағы ла башҡорт йырын яратыусыларҙы үҙенә йыйҙы. Ғафури районынан Рәмил Ҡотдосов "Оҙон көй" Төбәк-ара башҡорт халыҡ йырын башҡарыусылар бәйгеһе еңеүсеһе булды.**

Башҡорт фольклорында оҙон көйҙәр айырым урын алып тора. Тап ошо йырҙар халыҡтың милли үҙенсәлеген, эске донъяһының байлығын күрһәтә. Һәр профессиональ йырсы ла оҙон көйҙө башҡара алмай, бында белемдән тыш, тәбиғи һәләт, тауыштың моңлолоғо кәрәк. Йырсы башҡарған йырының милли үҙенсәлектәрен дә тойорға тейеш. Һәр һәлдә, ике көн буйына барған, 69 йырсы ҡатнашҡан бәйге был хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр раҫланы. Бәйгелә Башҡортостандың 8 ҡалаһы менән 21 районынан тыш, Ҡаҙағстан Республикаһынан, Силәбе өлкәһенән, Ҡазан ҡалаһынан башҡарыусылар булды. Иң йәш бәйгесе Амалия Ғәйнәхмәтоваға (Балтас районы) 8 йәш инә. Иң олоһо - Бөрйән районы уҙаманы Дәүләтбай Рәхмәтуллинға 81 йәш. Ул һирәк башҡарыла торған йырҙарҙың береһе "Бәҙриямал"ды башҡарҙы. I дәрәжәләге дипломға Әлфиә Мырҙабаева (Ейәнсура районы), Морат Заһиров (Туймазы ҡалаһы), Фуат Юнысбаев (Стәрлетамаҡ ҡалаһы) лайыҡлы тип табылды. Шулай уҡ II-III дәрәжә дипломдар тапшырылды, "Оҙон көй башҡарыу традицияларына тоғролоғо өсөн" номинацияһы еңеүселәре билдәләнде.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТҮРӘ БАРҘА ТҮРГӘ УҘМА

Ат барҙа бейә сапмаһын, ир барҙа ҡатын алға сыҡмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Теләһә ниндәй маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ҡыҫҡа һәм оҙон юл бар.

**(Зигмунд Фрейд).**

Мәңгелек ғазаптан ҡотолорға теләһәң, бер кемде лә ғәйепләмә, бер кемгә лә яла яҡма - Хоҙай быны яратмай.

**(Нил Синайский).**

Ғүмер оҙон, әгәр ул тулы булһа ғына. Шуға ла ғүмерҙе ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.

**(Сенека).**

Поликлиника - ул ауырыуҙар араһында тәжрибә уртаҡлашыу буйынса тиҙләтелгән курстар.

**(Сильвия Чиз).**

Элек ҡайһы берәүҙәр мемуарҙар яҙып, йәшәү өсөн аҡса эшләгән. Хәҙер иһә мемуарҙар яҙып баҫтырыу менән янап, тағы ла күберәк аҡса эшләүселәр бар.

**(Питер Устинов).**

Үс алыу - ул үҙенде тешләгән этте тешләү менән бер.

**(Остин О,Малли).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Франсуа Мориак).**

Ахмаҡлыҡ эшләргә ҡурҡмаған кеше һаман йәш әле.

**(Петр Капица).**

Кешегә әйбергә ҡараған кеүек ҡарарға ярамай, уның хаҡы барыбер әйберҙәке кеүек үк түгел.

**(Патрик О,Рурк).**

Танау аҫтындағыһын күреү өсөн күп талант кәрәкмәй, ә бына танауҙы ҡайһы яҡҡа борорға икәнде белеү ябай эштәрҙән түгел.

**(Уистен Оден).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы әҙәм үҙенең тормошона, Алланың уны Үҙенең изгелектәренән мәхрүм итеүенә зарлана икән. Быны ишетеп торған аҡыл эйәһе унан:**

**- Әйт әле, һин үҙеңдең күреү һәләтеңде йөҙ меңгә һатыр инеңме? - тип һораған.**

**- Юҡ, әлбиттә! - ти ярлы кеше.**

**- Ә башҡа ағзаларыңды? - тип ҡайтарып һорай ғалим.**

**- Юҡ! - ти ярлы.**

**- Ни өсөн һин хатта аҡсаға алыштырмаҫлыҡ байлығың була тороп, ярлымын, тип зарланаһың? - тип, был әҙәмде аҡылға ултыртҡан аҡыл эйәһе..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 2085/11